✓ *Яҙмышығыҙ ауыр, сәләмәтлегегеҙ насар икән - тимәк, аурағыҙ бысраҡ. Ауранды бысратып була икән, тимәк, уны таҙартырға ла мөмкин. Кеше шатлыҡ, бәхет һәм мөхәббәт торошонда икән, ул юғары тирбәлеш энергияһын бирә, аура таҙара, яҙмыш яҡшыра.*

**Руфан МОРТАЗИН.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№33 (451)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кеше атына менгән...**

тиҙ төшөр



3

**Төп хәстәребеҙ -**

эш урындарын арттырыу



5

**Көслөгә һыйыналар, көсһөҙҙән - тайшаналар...**

йәки Халҡыбыҙ тарихына тағы бер ҡараш



8-9

**Һин яратҡан һыраны...**

араҡыға тиңләнеләр бит тәки



15

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һайлауҙар демократияның нигеҙен тәшкил итә, тибеҙ ҙә ул, әммә ул үҙенә ышанысты ла ҡаҡшатып ҡуйғылай бит. Һеҙҙең бөгөнгө һайлау алды сараларына ҡарашығыҙ нисек?

***Риф ИҪӘНОВ, эшҡыуар:*** РФ Дәүләт Думаһына алдан тауыш биреүҙәр буйынса сара беҙҙә, Өфөнөң Калинин районында ла үтте. Депутатлыҡҡа кандидаттар Калинин, Нуриман һәм Иглин райондарынан йыйылған халыҡты үҙ программалары менән таныштырҙы, һорауҙарға яуаптар бирҙе. Үкенескә ҡаршы, эшҡыуар булараҡ, мин үҙемде борсоған һорауҙарға яуап ала алманым. Бәләкәй бизнес өлкәһе быға тиклем дә ҡыйыррһытылып килде, әлеге кандидаттар программаһында ла уны яҡлау ныҡлы урын биләп тора, тип әйтә алмайым. Кандидаттар араһында, ғөмүмән, ауыл хужалығы өлкәһе белгестәре булмауы йәки бик аҙ булыуы эсте бошора. Асылда, ҡаланы әлегә һаман шул ауыл хужалығы туйҙырып килә бит. Ауыл хужалығы системаһы юҡҡа сығып, тарҡалыу осоро кисергән бер мәлдә беҙ был турала - ләм-мин. Ни бары бер генә кеше ошо хаҡта һөйләне һәм шуның менән аграр мәсьәләләр башҡаса ҡуҙғатылманы. Кандидаттарҙың унауһы спорт өлкәһенән. Спортсыларға бер ҡаршылығым да юҡ, әлбиттә, ләкин кандидаттар төрлө өлкәләр мәнфәғәтен күҙәтергә тейеш. Бына ошо нисбәттең боҙолоуы оҡшамай миңә. Кандидаттар араһында Дәүләт Думаһының әлеге депутаттары ла бар.

**Улар араһынан Сәлиә Мырҙабаеваның сығышы бик оҡшаны. Уны мин халыҡ араһында һәр төрлө осрашыуҙарҙа йыш күрәм. Уның программаһы эшлекле, төплө, аңлайышлы. Минеңсә, депутат ана шулай эшләргә, даими рәүештә һайлаусылары араһында булырға, уларҙың наказдарын үтәргә, һорауҙарына яуап бирергә бурыслы.**

Юғиһә, бар бит бәғзе депутаттар - һайланыу менән үҙ вәғәҙәләрен онота һәм үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта башлай.

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары:*** Мәғлүм булыуынса, демократик илдәрҙә һайлауҙарға ныҡ иғтибар бирелә, сөнки уларҙа һайлауҙар ысын демократияның нигеҙ ташы булып тора. Рәсәйҙә иһә бик күп быуаттар буйына тәүҙә монархия, совет власы йылдарында иһә ниндәйҙер бер түрәнең йәки түрәләр йыйынының ҡарары өҫтөнлөк итеп килде. XIX быуатта иһә халыҡ ризаһыҙлығынан, революциянан ҡурҡып, батша һайлауҙар системаһын индерҙе. Рәсәйҙе демократиялаштырыу шунан башланды. Совет йылдарында ла булды ул һайлауҙар, тик ул бер партия директиваларын, алдан хәл ителгән ҡарарҙарҙы үтәү ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

МИН БЕЛГӘН УРЫҪ

МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ
ГОД УКРЕПЛЕНИЯ МЕЖНАЦИОНАЛЬНОГО СОГЛАСИЯ

# БАШҠОРТ АРБАҺЫНА УЛТЫРЫП...

## башҡорт йырын йырлаусы улар

**Берлектә - бәрәкәт, тарҡаулыҡта - һәләкәт, тип ҡалай аҡыллы әйткән халҡым. 2011 йыл республикабыҙҙа Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы тип иғлан ителде. Быныһы - быуаттар һуҙымында һынала, нығына килгән дуҫлыҡты йөпләү, уның бәҫен арттырыу, хаҡ-баһаһын Хөкүмәт кимәлендә таныу ғына. Шағир әйтмешләй, рус һәм башҡорт яуҙа яуҙаш булһа, табындаштар оло байрамда...Хоҙай тарафынан рус халҡы менән бергә булыу, бер үк һыуҙы эсеп, бер ерҙе тапап йәшәү яҙған беҙгә. Тәҡдирҙе үҙгәртер ҡөҙрәт кешегә бирелмәгән.**



(Дауамы 6-сы биттә).

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# МӨҒЖИЗӘГӘ ЫШАНЫУ КӨСӨ

**Һәр бер кеше мөғжизәгә ышанырға һәләтлеме? Ғөмүмән, әҙәм балаһының мөғжизәгә ышаныу ихтыяжы нимәгә нигеҙләнә? Тормош, тәбиғәт, донъя, йәшәйеш проблемаларының асылын аңларға тырышҡанда мөғжизәнең роле нимәгә ҡайтып ҡала?**

Күптән түгел Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, күренекле дин әһеле Ғабдулла ишан Сәйдиҙең тыуыуына 175 йыл тулыуға арналған халыҡ йыйыны уҙҙы. Күренекле дин әһеленең тормош юлына, дини-педагогик эшмәкәрлегенә арналған ғилми-ғәмәли конференция уҙыуы йыйындың төп ваҡиғаһы булып торҙо тиһәк, һис тә хаталанмабыҙ. Барлыҡ сараларҙың Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Баймаҡ районы хакимиәте тарафынан ойошторолоуы һәм ошо ойошмаларҙың етәкселәре Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллиндың, ғалимә Фирҙәүес Хисаметдинованың, район башлығы Илшат Ситдиҡовтың дини йыйында ҡатнашыуы һәм сығыш яһауы сараның әһәмиәтен рәсми юғарылыҡҡа күтәрҙе. Сарала шулай уҡ Урал арьяғы райондары етәкселәре, дин әһелдәре ихлас ҡатнашты. Иншалла, Баймаҡ ерендә лә бындай йыйындар рәсми кимәлдә яҡлау тапты.

Һүҙебеҙҙе мөғжизәгә ышаныу ихтыяжынан башлағайныҡ. Бер хәҡиҡәткә шигебеҙ юҡ: Аллаһы Тәғәләгә, ул тыуҙырған мөғжизәләргә ышаныу көсө ошондай йыйындарға йылдан-йыл халыҡты күберәк йыя. Хәйбулла районының Вәлит ауылында Ғатаулла ишанды, Баймаҡ районының Манһыр ауылында Мөхәүир хәҙрәтте иҫкә алған ошондай йыйындарҙан һуң Аллаһы Тәғәләнең тап ошо төбәккә ҡоролоҡтан сарсағанда ҡойма ямғырҙар бүләк иткәнен Урал арьяғы халҡы яҡшы иҫләй. Ямғыр яуған ергә ҡот, ырыҫ ҡуна, тимәк, изгеләрҙең ҡәберенә барып аят уҡыу, Аллаһы Тәғәлә хозурына килеү йәшәүгә лә ҡот, ырыҫ алып ҡайта. Бына ошо хәҡиҡәтте раҫлай Хаҡ Тәғәлә тыуҙырған мөғжизәгә ышаныу көсө.

Әле республикабыҙ ауылдарында һәм ҡалаларында бер-бер артлы мәсеттәр ҡалҡа. Бик һөйөнөслө күренеш, тик уларға ла халыҡ ошондай йыйындарға эркелеп килгән кеүек ағылһын ине. Хаҡ Тәғәләбеҙ тыуҙырған мөғжизәләргә ышаныу көсө ошоға ла ярҙам итер тип ышанабыҙ. Амин, шулай булһын!

**Һәйүндәк АҪЫЛОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һайлауҙар демократияның нигеҙен тәшкил итә, тибеҙ ҙә ул, әммә ул үҙенә ышанысты ла ҡаҡшатып ҡуйғылай бит. Һеҙҙең бөгөнгө һайлау алды сараларына ҡарашығыҙ нисек?

**(Башы 1-се биттә).**

Үткән быуат аҙағындағы түңкәрелештән һуң Б.Ельцин демократия иғлан итте. Шунан алып илдә ысын демократия урынлаша башлағайны. Ул йылдарҙа, хәтерләһәгеҙ, депутаттарҙы ғына түгел, хатта эреле-ваҡлы түрәләрҙе лә һайлап ҡуя башлағайныҡ. Үкенескә ҡаршы, XXI быуат башында демократия тәгәрмәсе кирегә боролдо. Мәсәлән, сәйәси ситуацияға һылтанып, иң тәүҙә губернатор, республикалар президенттарын һайлау туҡтатылды. Ҡала, район башлыҡтары тәғәйенләп ҡуйыла башланы. Һайлауҙарҙың даирәһе тарайғандан-тарая барҙы. Ысын демократияға нигеҙләнмәгәс, халыҡ һайлауға йөрөмәй башланы. Шуға күрә лә тауыш биреү кимәленең легитимлығы 25 процентҡа тиклем төштө. Әштең ҡайҙа барыуын Мәскәүҙәге даирәләр ҙә төшөнә башланы, буғай. Халыҡты һайлауҙарға йәлеп итеү маҡсатында Бөтә Рәсәй халыҡ фронты булдырылды. Парламент - ул халыҡ вәкиллеге. Халыҡ ҡатламы банкирҙар, олигархтар, сәйәсмәндәр, түрәләр, артистар һәм спортсыларҙан ғына тормай.

**Күреүегеҙсә, депутаттар араһында эшсе һәм крәҫтиәндәр мәнфәғәтен яҡлаусы юҡ. Улар булһын өсөн эшсе һәм крәҫтиән араһынан да депутаттар булырға тейеш.**

Бөгөн Американың һайлауҙар системаһына хас праймериз тигән алымды үҙләштерергә маташалар маташыуға. Демократия - уйын түгел, уның менән уйнай башлаһалар, ул берәүгә лә кәрәк булмаясаҡ. Һайлауҙар ысын демократик ерлектә генә үҙ маҡсатына һәм теҙелләккә өлгәшәсәк икәнлеген онотмаһаҡ ине.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" гәзите мөхәррире:*** Һуңғы йылдарҙа халыҡтың депутаттар корпусына ышанысы ҡаҡшауын күрмәү мөмкин түгел. Күптәр һайлауҙарға йөрөмәй башланы, сөнки тау-тау вәғәҙәләр бүләк итеп, кәрәкле тауышты йыйып, депутат булып алған "халыҡ һайланыусылары" аҙаҡ рәхәт тормошҡа сумды, һайлаусыларын да, вәғәҙәләрен дә онотто. Кемде һайлауыбыҙ беҙҙең үҙебеҙгә бәйле, әлбиттә. Ҡоро вәғәҙәләргә ышанып, кем етте - шуға тауыш биреү бигүк шәп түгел. Ундай айырым депутаттар арҡаһында ғөмүмән һайлауҙар системаһына ҡул һелтәү дөрөҫ түгел. Әйтеүемсә, кемде һайлау беҙҙең үҙебеҙҙән тора. Анығ ғәмәлдәре менән халыҡ араһында абруй ҡаҙанған, эше лә, һүҙе лә бер ышаныслы кешеләрҙе һайларға кәрәк. Ә һайлауҙар кәрәк, сөнки ул демократияның нигеҙен, асылын тәшкил итә. Был бөгөнгө ысынбарлыҡ. Күреүебеҙсә, күберәк халыҡты йәлеп итеү, кандидаттарҙың "иңиңдәрен" һайлап алыу мөмкинлеге биреү маҡсатында праймериз - алдан һайлау сараһы ҡулланыласаҡ хәҙер. Әле ниндәйҙер дәрәжәлә һынау үтһә лә, киләсәктә был алым нормаға әйләнер, тип уйлайым.

***Фәрит ӘХМӘРОВ, Сибай ҡалаһы, пенсионер:*** Дөрөҫөн әйтәм, "праймериз" һүҙен мин тәүҙә ҡабул итмәнем. Тәүҙә - халыҡ фронты, хәҙер ҡолаҡҡа яҡмаған ниндәйҙер праймериз... Путиндың һайлауҙар алдынан алып барған сәйәсәтенең сираттағы бер дауамылыр, тип уйланым. Шулай булып сыҡты ла. Йәштәр менән сираттағы осрашыуында В. Путин йәшермәйенсә, Бөтә Рәсәй халыҡ фронты "Берҙәм Рәсәй"ҙе нығытыу өсөн ойошторолдо, һәр партия үҫергә, яңырырға тейеш, праймериз шуның өсөн кәрәк, тине.

Яңыраҡ Башҡортостанда ла праймериз үтте. Халыҡ унда бик теләп ҡатнашты, тип әйтә алмаҫ инем. Күп кеше белмәй ҙә, ишетмәй ҙә ҡалды. Ваҡыты ла дөрөҫ һайланмағайны: йәй, бөтә кеше ялда, бесән саба, еләк йыя, баҡсала тир түгә, балаларын уҡырға индерә...

Ә бит, уйлап ҡараһаң, праймериз бик шәп нәмә. Муниципаль берәмек етәкселәрен һайлағанда ла ҡулланырға кәрәк был сараны. Кем етәксе булырға хыяллана, әйҙә, сығыш яһаһын. Тиҫтәләгән, йөҙәрләгән кеше араһынан халыҡ үҙенә оҡшағанын һайлап алыр. Әлегә бит муниципаль орган етәкселәре дуҫлыҡ-танышлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ принсибы менән "һайлана".

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше?**

● Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

Икенсенән, теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү.

"Киске Өфө" аҙналыҡ баҫмаһы тап ошо бурысты йөкмәгән иңенә. Әйҙәгеҙ, уны уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәнәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек.

● Әйткәндәй, кемдәр быйылғы йылдың икенсе яртыһы йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, һәр айҙың 17-һенә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитте киләһе айҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ. 31 августҡа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән (**50665** индекслыһына **340 һум 92 тин**, **50673** индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тин**) ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу бара, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Августа гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләккә 5 **"Ҡөрьән-Кәрим"** һәм 20 **"Дини календарь"** (2012 йыл өсөн) әҙерләп ҡуйғанбыҙ.

● Кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика 2011 йылда инвалид балаларҙы дистанцион уҡытыуға 19 миллион һум аҡса бүлә, был маҡсатта федераль бюджеттан да 46 миллион һум аҡса буленәсәк. Балалар компьютер, сканер, фотоаппарат кеүек кәрәкле ҡорамалдар комплекты менән тәьмин ителәсәк. Был аҡса ярҙамында тағы 150 бала яңы уҡыу йылында өйҙә уҡыясаҡ.

✓Башҡортостан "Мәскәү - Екатеринбург" (ВСМ - 2) юғары тиҙлекле магистрале төҙөлөшөн тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашыу, республика проектта транзит нөктәһе генә булып ҡалмаһын өсөн әүҙем эш алып бара. ВСМ - 2 Өфө, Ҡаҙан, Пермь, Владимир, Түбәнге Новгород, Һамар ҡалаларын үҙ эсенә аласаҡ.

✓Быйыл ете айҙа республиканың Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенә 220 мең кеше мөрәжәғәт иткән. 56500 кеше эшкә урынлаштырылған, 6400-ө уҡырға ебәрелгән. Йыл башынан халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәренә 135 мең вакансия килгән. Әле мәғлүмәттәр банкыһында 33 меңгә яҡын эш урыны иҫәпләнә. Республикала 31500 эшһеҙ рәсми теркәлгән. Республикала шулай уҡ физик мөмкинлектәре сикләнгән граждандар төркөмөндәгеләрҙе лә эш менән тәьмин итеү йүнәлеше ғәмәлгә ашырыла. Хәҙер ошо төркөмгә инвалид бала тәрбиәләүсе атаәсәләр генә түгел, ә күп балалы ғаиләләр ҙә инә. Программа буйынса бөгөнгә 70 кеше эшкә урынлаштырылған.

✓Башҡортостанда Асылыкүлде үҙ эсенә алған "Асылыкүл" паркы булдырылды. Уның майҙаны 47 мең гектарҙан ашыу. Көн һайын бында меңәрләгән кеше ял итә, унлаған кубометр ҡый, ҡалдыҡтар ҡалдыра. БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Азат Ҡотлөхмәтовтың Дәүләкән районы хакимиәте башлығы Закир Бикбулатов менән осрашыуы барышында парк территорияһынан сүп-сарҙы йыйыу һәм сығарыу системаһын ойоштороу тураһында килешеүгә өлгәшелде.

✓Башҡортостанда ипотека баҙары һиҙелерлек үҫә. Быйыл ғинуарҙан июнгә тиклем ипотека кредиттары күләме һәм һаны ике тапҡырға артҡан. Республика халҡына ошо йүнәлештә 5700 кредит бирелгән, ә былтыр тәүге ярты йыллыҡта был һан 2500 булған. Заемдарҙың күләме 5,2 миллиард һумдан ашып китә. Ошо күрһәткестәр буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында өсөнсө урынды биләй.

*✓ Американлылар беҙгә үҙҙәренең атын йәки йәшәү рәүешен тәҡдим итә, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй, прагматизм милли рухты үлтерә, индивидуализм милләтте, кешелекте эске яҡтан тарҡата...*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КЕШЕ АТЫНА МЕНГӘН...

## тиҙ төшәр

**Был әйтемдә һүҙ, ысынлап та, сит кеше атына менеү хаҡында барамы, әллә башҡа төрлө ярамаған ғәмәл башҡарыу тураһындамы? Ғөмүмән, "кеше атына менеү" һүҙбәйләнешен нисек аңларға була һуң? Бында дүрт аяҡлы атҡа менеү генә күҙ уңында тотоламы? Ошо хаҡта ентекләберәк фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Ленин исемендәге колхоздың беҙҙең 4-се һанлы Буранбай ауылы бригадаһында оҙаҡ йылдар һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мәһәҙей олатай Ҡотоев (йәш йырсылар Марсель менән Нух Ҡотоевтарҙың ҡартатаһы) бригадир булып эшләне. Унан һуң бригадир дилбегәһен атайым үҙ ҡулына алды. Йола буйынса яңы бригадирға хужалыҡ дилбегәһе генә түгел, хужаның төп транспорты булған екке атының да дилбегәһе, арба-санаһы, ҡамыт-ыңғырсағы күсә. Тап ошо көндәрҙә беҙ, яңы бригадир балалары, бер башҡа үҫеп киткән һымаҡ булдыҡ. Шулай булмай һуң: ауылыбыҙҙың ғына түгел, беҙҙең төбәктә йәшәүсе һәммә йәше-ҡартының күҙе ҡыҙып, көнләшеүҙән эсе янған туры юрға хәҙер беҙҙең ихатаға боролоп инә бит. Ғорурлығы ни тора! Башҡорт тоҡомло аттар үҙенең бауыр аҫтынан ғына булған был мөһабәт туры юрғаны ҡайҙандыр ситтән, Дон яғынанмы, Орел яғынанмы ҙур хаҡҡа һатып алып килтергәйнеләр.

Беҙҙең кеүек танау аҫты кипмәгән малайҙар өсөн туры юрға, үәт, ат ине, исмаһам! Аттың да ниндәйе бит әле! Үҙен ҡыш санаға, йәй арбаға егеп алаһың да, дилбегәне бер генә ҡағыуың була, доҡойтоп сығып та китә. Туры юрға егелгән арба ауылдың башҡа барлыҡ ат-арбаларын ғына түгел, машина-тракторҙарын да үтеп китә, үҙебеҙсә әйткәндә, "тапап" үтә хатта. Соҡорһарҡыуҙар ҙа, һикертмәләр ҙә юҡ уның өсөн, һәр урында ла бер тигеҙ юрта ғына бирә. Юрғаның һыбай йөрөүҙәге бер уңайһыҙлығы бар: ул да булһа, яйҙаҡ атланып алдыңмы, осандың йәне ҡалмай, шуға күрә юрғаларға эйәр һалып менеп, өҙәңгеһенә баҫып, эйәр ҡашағаһына тотоноп, баҫып ҡына йөрөйһөң. Әгәр ҙә дилбегәне йомшағыраҡ ҡуллы бирәйһе, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ тотһа, туры юрға менән йөрөү оло хәүефкә әүерелә.

Бер мәл турыны егеп урманға бесәнгә барҙыҡ. Ҡайтыр саҡ еткәс, атайыбыҙ арбаға бесән, башҡа әйберҙәр һалып, дилбегә артына әсәйебеҙҙең бер үҙен ултыртып, ауылға ҡайтарып ебәрҙе. Беҙ атайҙың мотоциклына ултырып, һуңғараҡ ҡайттыҡ. Өйгә ҡайтыуыбыҙға күҙебеҙ дүрт булды: әсәйебеҙҙең ҡото алынған, арбанан барлыҡ әйберҙәр төшөп ҡалған, хатта һыңар бөртөк бесән дә ҡалмаған. Туры юрға дилбегә артында гүзәл заттың ултырыуын тойған да, ауыҙлығын тешләп тороп алып, машина тиҙлегендә ауылға табан елдергән.

Бригадир еккеһе туры юрға хаҡында оҙон тәфсиргә төшөп яҙыуымдың әтнәкәһе шунда: беҙҙең ауылға, беҙҙең ерлеккә өйрәнә алманы ул сит мал. Әллә күпме арбабыҙҙы ҡыйратты, ҡамыт-ыңғырсаҡты эшлектән сығарҙы туры юрға. Уны бер мәл хатта һабантуйҙа бәйгегә сығарып ҡараныҡ. Юҡ, тәүге әйләнешкә тиклем башҡа аттарҙы күпкә артта ҡалдырып юртып килде лә, һыртындағы малайға баш бирмәй, туранан-тураға елдерҙе туры юрға. Уны көтөүселәр ҙә көтөүгә менеп ҡараны. Ҡыҙыҡ итеп һөйләнеләр көтөүселәр. Туры юрғаны менеп сыҡтыңмы, көтөү ҡайғыһы китә, сөнки барлыҡ иғтибарыңды һәм иждиһатыңды туры юрғаның үҙенә бирергә кәрәк. Йә баш бирмәй, йә ҡасып китә, йә алып ҡаса, йә булмаһа, бер көн ныҡлы ҡулда тотоп көтөүҙә йөрөһәң, иртәгеһенә бөтөнләй йөрөргә эшкинмәй. Етмәһә, үҙенең буйы бейек булғас, атланыуы ҡыйын. Үҙенең һыртына тиҙ генә эйәр һуғып бара, арҡаһы әҙәм ҡарағыһыҙ булып сейләнеп бөтә. Мал ҡараусылар туры юрғаны ҡыш силос, сенаж, бесән ташыу өсөн дә егеп ҡараны. Кәүҙәһе ғифриттәй булһа ла, йөк тартыуға бөтөнләй яраҡһыҙ булып сыҡты туры юрға.

Беҙҙең башҡорт ысынбарлығы, ауыл тормошо өсөн яратылмағайны шул ул ат. Шуға күрәлерме, беҙ ул туры юрғаның мәнфәғәтен күрә алманыҡ, уға кем генә менмәһен, һыртынан тиҙ төштө, кем генә екмәһен, тиҙ туғарҙы. Ә бит ситтән ҡарап тороуға ниндәй күркәм, мөһабәт, һоҡланғыс, үҙенә ҡарап туйғыһыҙ мал ине туры юрға. Әкиәттәге арғымаҡ, дөлдөл кеүек үҙе, гүйә. Баҡтиһәң, туры юрға ситтән ҡарағанда ғына шулай күркәм һәм үҙенә ылыҡтырғыс ине. Ҡыҫҡаһы, хандар, батшалар ҡырандастарға егеп, юрғалатып, кәлеп һалып йөрөр өсөн генә яратылған туры юрға беҙҙең милли тормошто, йәшәү рәүешебеҙҙе ҡабул итә алманы. Һыйырға эйәр нисек килешмәһә, беҙҙең тормош туры юрғаға ла яраманы.

Уны иң тәүҙә ҡырға һыпырып ебәрҙеләр. Тибенгә өйрәнмәгән меҫкен мал Уралтауҙың ҡырыҫ тәбиғәтен бик ауыр кисерҙе, буғай. Һуңынан ҡороҡлап тотоп, үҙен Сибайҙағы ит комбинатына тапшырҙылар. Туры юрғаның тәржемәи хәле ҡыҫҡаса ошолай булды.

Юғарыла бригадир еккеһе туры юрға, мал хаҡында һүҙ барһа ла, уның хаҡында барған әңгәмәнән сығып шундай фәлсәфәүи һығымталар яһарға булалыр:

- сит кеше атына менгән, ысынлап та, тиҙ төшә, сөнки һәр кемдең үҙ аты, үҙ хәрәкәт сараһы булыуы мөһим, кеше аты һинең көнкүрешеңә, йолаларыңа яраҡлашмаған һәм һабан һөрә торған ат менән бәйгелә сапмайҙар йәки - киреһенсә;

- ат һүҙенең икенсе бер мәғәнәһе "исем"де аңлата, шуға күрә башҡа кеше ирешкән уңыш, хеҙмәт емеше менән оҙаҡ йәшәп булмай, һәр кешенең үҙ атына, үҙ исеменә бәйле үҙенсәлекле тормош үҙәне, яҙмышы бар, башҡа кешенең яҙмышы менән дә йәшәп булмай, һәр ваҡыт кеше елкәһендә йәшәү ҙә мөмкин түгел, ҡасан да булһа, үҙеңсә йәшәй башларға мәжбүр булаһың;

- беҙҙең ил халҡына Европа прагматизмы, Америка индивидуализмы көсләп тағыла, йәғни европалылар һәм американлылар беҙгә үҙҙәренең атын йәки йәшәү рәүешен тәҡдим итә, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй, прагматизм милли рухты үлтерә, индивидуализм милләтте, кешелекте эске яҡтан тарҡата...

Донъяла глобалләшеү, милләттәр араһында интеграция барған ошо заманда был әйтем бигерәк актуаль булып ҡала. Заман һынауын үҙ аты, үҙ йәшәү рәүеше, йола-традициялары булған дәүләттәр һәм милләттәр генә имен-аман үтеп сыға аласаҡ. Беҙҙе архаиклыҡта йөҙ-мең тапҡыр ғәйепләһендәр, былар барыһы ла үҙ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу йәһәтенән эшләнә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҮҘЕНДЕ ЯҠЛАУ НИСЕК БУЛА?

**Тормошта үҙ-үҙебеҙҙе яҡлай белмәгән саҡтарыбыҙ булып тора. Бигерәк тә ата-әсә бәпләүенән сыға алмаған бөгөнгө заман балаларының киҫкен мәлдә баҙап ҡалыуы, үҙ-үҙен яҡлай алмауы хафаландыра...**

Үҙ-үҙеңде яҡлау, тигәндән. Бала саҡтан өйрәнергә кәрәк уға. Бына, мәҫәлән, балаһы мәктәптән кемдер рәнйетте тип илап ҡайтып инһә, ата-әсә тотона был хәлде тикшерергә. Хәҙергеләр шулай, ә элеккеләр улай булманы. Беҙҙең ата-әсәләр былай осраҡта үҙебеҙҙе әрләр ине, үҙеңде яҡларға өйрән, тиер ҙә, "боҙло һыуға" һалыр ине. Ата-әсә яҡламағас, йәғни мәктәпкә барып, урамға сығып, балаһын рәнйеткән кешеләр менән әрләшеп йөрөмәгәс, үҙеңде үҙеңә яҡларға ҡала ине...

Үҙеңде яҡлайым, тип ни эшләргә һуң? Ең һыҙғанып һуғышырға кәрәкмәй. Тел сығарып әрләшергә лә кәрәкмәйҙер. Бер риүәйәт бар: "Йыландың ҡылғандарына зарланып, халыҡ Аллаһы Тәғәләгә "Йылан беҙҙе тешләй, саға, һөжүм итә", - тип мөрәжәғәт иткән. Хоҙай Тәғәлә йыланға :"Ниңә кешеләрҙе ыҙалатаһың, ниңә сағаһың, һөжүм итәһең, үлтерәһең?" -тип өндәшкәс, йылан: "Һуң кешеләр үҙҙәре мине рәнйетә бит, үтеп китергә лә ирек бирмәйҙәр, таяҡ менән туҡмайҙар, таш бәрәләр..."- тигән. "Әлбиттә, һин үҙеңде яҡларға тейешһең. Тик кешеләрҙе үлтергәнсе саҡма, ә ҡурҡытып алыу өсөн телеңде сығарып ыҫылда ғына",- тигән Хоҙай. Шуның кеүек, үҙеңде рәнйетеүселәргә уларҙың уҡ "ҡоралы" менән яуап биреү өсөн үлтерешергә, һуғышырға, туҡмашырға кәрәкмәй, ә яуапһыҙ ҡалмаҫҡа, үҙеңдең төшөп ҡалғандарҙан түгел икәнеңде һүҙ менән генә белгертеп ҡуйырға кәрәк. Бер-ике тапҡыр шулай итһәң, артабан һиңә һөжүм итмәйәсәктәр һәм бәйләнмәйәсәктәр. Үҙ-үҙеңде яҡлау шулай була...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы буйынса Кадастр палатаһының күсмә теркәүҙәре дауам итә. Үткән айҙа Башҡортостандың 45 муниципаль районында урынлашҡан 124 күсмә пунктта документтар ҡабул итеү ойошторолдо. Граждандар күсемһеҙ милкенә хоҡуғын теркәү, улар менән төрлө алыш-биреш башҡарыу өсөн 1470 папка документ тапшырған. Шулай уҡ республиканың ауыл-ҡалалары халҡы ергә хоҡуғын рәсми теркәү, күсемһеҙ милкен кадастр иҫәбенә ҡуйыу, дәүләт пошлинаһының күләме, дәүләт теркәүе тәртибе буйынса кәңәштәр, мәғлүмәттәр алған. Был юлы күсмә теркәүҙәр республиканың 43 муниципаль районындағы 450 пунктта ойоштороласаҡ.

✓ Башҡортостандағы бәләкәй һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡалаларҙың йорт яны биләмәләрен төҙөкләндереү буйынса Президент программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә муниципалитеттар республика бюджетынан 300 миллион һум күләмендә адреслы ярҙам аласаҡ. Был ярҙамды Ағиҙел, Баймаҡ, Бәләбәй, Белорет, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Дүртөйлө, Ишембай, Күмертау, Мәләүез, Нефтекама, Октябрьский, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Учалы, Яңауыл, Межгорье ҡалалары һәм ҡала тибындағы Приют, Шишмә ҡасабалары аласаҡ. Уларҙа 1,391 миллион кеше йәшәй.

✓ Өфөлә "ИКЕА" сауҙа үҙәген асыу өсөн бер айҙан кәмерәк ваҡыт ҡалды. Һатып алыусылар өсөн ишектәр 25 августа асыласаҡ. Тәүге ярты йыллыҡта Өфөлә йәмғеһе 23 мең квадрат метрҙан ашыу күләмендә 22 яңы сауҙа объекты сафҡа индерелгән. Йән башына иҫәпләгәндә сауҙа майҙандарының һаны буйынса Башҡортостан баш ҡалаһы Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында алдынғы урындарҙы биләй. Өфөнөң ваҡлап һатыу һәм дөйөм туҡланыу селтәре 5 меңдән ашыу, шул иҫәптән 3 мең стационар объектты үҙ эсенә ала.

✓ Быйыл Башҡортостанда тыуым 3,7 процентҡа кәмегән, үлем осраҡтары 5,5 процентҡа артҡан. Республика халҡының тәбиғи кәмеүе ярты йыл эсендә 0,7 процентҡа артҡан. Үлем сәбәптәренең төп сәбәбе, элеккесә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары (51,1 процент),яман шеш (10,6), бәхетһеҙлек осраҡтары, ағыуланыу һәм имгәнеүҙәр (9,7 процент).

***✓ Матурлыкты һаҡлап, ҡәҙерләп торғанда ғына ул күңелдәрҙе елкендереү, хисләндереү, матур тойғолар менән тулыландыра. Шуға күрә беҙ тәбиғәт ҡосағында ял итеүҙең тәүге ҡағиҙәһе - уны бысраныуҙан һаҡлау тип һанайбыҙ.***

ҮӘТ ӘЙ!

# ТӘБИҒӘТТЕ СҮПЛӘҮ...

## үҙ битеңә төкөрөүгә бәрәбәр

**Йәй - тәбиғәт ҡосағында ял итеү өсөн иң күңелле миҙгел. Кемдер дуҫтары менән шөшлөк ҡыҙҙыра, икенселәр ғаиләһе менән балыҡ ҡармаҡлай, һыу инә, өсөнсөләр иһә киң сәхрә-ҡырҙарҙа палаткалар ҡороп, бер-нисә көн ял итә. Тәбиғәт үҙ хозурлығын һәм күркәмлеген кешегә йәлләмәйенсә бүләк итә һәм кешенән дә ошоно көтә. Тик кемгәлер был хәҡиҡәтте аңлауы үтә лә ауыр, күрәһең, сөнки ҡайһы бер ял итеүселәр үҙҙәре артынан тауҙай сүп-сар ҡалдырып китеүҙә бер хилафлыҡ та күрмәй. "Үҙегеҙҙе тәбиғәт ҡосағында нисек тотаһығыҙ?" тигән һорау менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт итеп, түбәндәге яуаптар алдыҡ.**

**Азат һәм Лилиә Сәйфуллиндар, Өфө ҡалаһы:** Әгәр ҙә йәйҙе ҡалала үткәрергә тура килһә, дуҫтар менән ике аҙнаға бер булһа ла тәбиғәт ҡосағына сығып, ял итеү беҙҙең өсөн ҡағиҙәгә әйләнгән, тиһәң дә була. Башҡортостаныбыҙ тәбиғәте башҡа бер ерҙә лә булмаған матурлыҡ, гүзәллек, күркәмлекте үҙенә йыйған. Ләкин матурлыҡты һаҡлап, ҡәҙерләп торғанда ғына ул оҙаҡ йылдар күңелдәрҙе елкендереү, хисләндереү, матур тойғолар менән тулыландырыу көсөнә эйә. Шуға күрә беҙ тәбиғәт ҡосағында ял итеүҙең тәүге ҡағиҙәһе - уны бысраныуҙан һаҡлау тип һанайбыҙ. Ҡайҙалыр ял иткәндән һуң үҙебеҙҙең сүп-сарҙы ғына түгел, беҙҙән алда ҡалдырылып киткәнде лә йыйып алабыҙ.

**Гүзәл Алсынбаева, Ғафури районы:** Минең районым иң күркәм тәбиғәтле ерҙә урынлашҡан. Шуға күрә беҙгә ял итергә килеүселәр бихисап. Уларҙың берәүҙәре үҙен тәртипле тота, ә кемдер иһә үҙен был донъяла һуңғы көн йәшәгәндәй тойоп, хайуандарса ҡылана: бөтә сүп-сарын ултырған ерендә ташлай, усағын һүндермәй, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә ағас һындыра, ялан йәмләп ултырған сәскәне өҙә һәм шунда уҡ ташлап китә. Ә иң үкенеслеһе: уларҙың ҡыланышын яндарында уйнап йөрөгән балалары күрә һәм быны ғәҙәти хәл итеп ҡабул итә башлай. Үҙебеҙгә шундай алмаш үҫтергәс, киләсәктә уларҙан ниндәй яҡшылыҡ көтөргә була? Тәбиғәт - ял итеү урыны ғына түгел, ә йәшәйештең нигеҙе. Уны сүпләү, ҡоротоу - үҙебеҙҙең киләсәкте юҡ итеүгә бәрәбәр.

**Илнур Вәлиев, Магнитогорск ҡалаһы:** Тәбиғәткә йыш сығыу тәтемәй, шуға дуҫтар менән күберәк ҡала парктарында ял итәбеҙ. Элегерәк ҡайҙа ултырғанбыҙ, шунда сүп ташлау беҙҙең өсөн ғәҙәти хәл булды һәм быным яҡшы-насар яҡтарын уйламай ҙа инек, сөнки янибыҙҙа ял итеүсе ололар ҙа нәҡ шулай ҡыланды. Ә хәҙер әллә үҙебеҙ ҙурайып, донъяға икенсе күҙлектән сығып ҡарай башланыҡ, элекке кеүек ҡыланмайбыҙ. Ҡала парктарын көн дә йыйыштырып торалар, ә тәбиғәт сүп-сар менән үҙе "көрәшә". Ҡасан да булһа, быйндай "көрәш" тәбиғәтте ялҡытып, кешелеккә үҙе ҡылған яуызлыҡтың емештәрен татырға тура килмәгәйне.

**Гөлнар Солтанова, Белорет районы:** Тәбиғәтте сүпләү - ул үҙеңдең битеңә төкөрөүгә бәрәбәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәбиғәттә үҙен әшәке, әхлаҡһыҙ тотоусы кешене күреү асыу ғына түгел, ә йәлләү хисе лә уята. Сөнки әле генә үҙе рәхәтләнеп ял иткән матурлыкты ҡаҡшатыусы кеше тәбиғәтте генә түгел, ә үҙенең дә күңелен бысраҡҡа батырыусыға тиң түгелме?**

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН



# ТОРАТАУҘА...

## спорт һәм туристик-мәҙәни комплекс буласаҡ

**Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетында Торатау янында спорт һәм туристик-мәҙәни комплекс төҙөү тураһындағы мәсьәләгә арналған кәңәшмә үтте.**

Торатау - быуаттар дауамында кеше тарафынан һаҡланып килгән мөғжизәле тәбиғәт ҡомартҡыларының береһе. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар юрматы ырыуы башҡорттары һәм ошо территорияла йәшәгән башҡа халыҡтар өсөн изге һаналған тау янында инфраструктура булдырыу һәм уның үҫешен тәьмин итеү тәҡдиме һәм проекты менән сығыш яһаны. Торатау янында туризм комплексы үҫешһен өсөн әле төҙөлөш эштәре алып барылған мемориал комплекс янында туристик, спорт һәм мәҙәни үҙәктәр булдырыу кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Шулай уҡ бер-нисә яңы туристик маршрут асыу мөмкинлеге лә ҡаралды.

- Киләсәктә Торатау брендын әҙерләү һәм уны үҫтереү эшен алып барасаҡбыҙ, - тине БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары Наталья Никольская. - Торатау янында төрлө саралар, фестиваль һәм слеттар уҙғарыласаҡ тип планлаштырыла. Шулай уҡ территорияны төҙөкләндереү эштәре лә алып барыласаҡ.

Кәңәшмәлә шулай уҡ Ишембай районы территорияһында туризмды һәм кәрәкле инфраструктураны үҫтереүҙе үҙ өҫтөнә алған муниципаль идара итеү компанияһы булдырыу һәм Башҡортостандың Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы алдында Торатауға тәбиғәт һәйкәле статусын биреү тураһындағы мәсьәләне күтәреү хаҡында ла һүҙ күтәрелде. Шихандар дүрт тауҙан тора: Торатау, Йөрәктау, Шахтау һәм Ҡуштау. Күптән инде карьерға әйләнгән Шахтауҙа бурташ ҡатламы бөтөп барыу сәбәпле Йөрәктау ҙа уның яҙмышын ҡабатларға мөмкин. Дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, был үҙенсәлекле комплексты һаҡлап ҡалыу маҡсатында Торатау янында Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы һәм Мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре ҡатнашлығында күсмә кәңәшмә үткәреү мәсьәләһе ҡаралды.

**Любовь КОЛОКОЛОВА. "Башинформ".**

Ah-Ah!




# ҠАҒЫҘҘАН...

## бәҙрәф эшләргә буламы?

Был фирманың бер нисә йыл элек бәҙрәф ҡағыҙына республиканың дәүләт символикаһын төшөрөп "даны" таралғайны. Уның үҙ ижадында яңы "үрҙәр" яулауы дауам итә. "Наҙлылы" һүҙе русса "Нежнейшая" тип тәржемә ителә, күрәһең. Ә "Рәссәй" һүҙенә күҙ һалығыҙ. Ул ниҙе аңлата?

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

# ИҢ ЯҠШЫҺЫ...

## дауаханаға бармау

**Йыл башынан ғәмәлгә ингән "Мотлаҡ медицина страховкаһы тураһында"ғы Законға ярашлы, ил халҡы үҙ теләге буйынса дауалаусы табибын һәм поликлиникаһын алмаштыра ала. Йәғни элек пациенттар теркәлеү урыны буйынса хеҙмәтләндерелһә, хәҙер инде ҡасан, ҡайҙа дауаланыу алыуҙы һайлау хоҡуғы барлыҡҡа килде.**

Хәҙер дауаланыусы район медучреждениеһына ғына түгел, мотлаҡ медицина страховкаһы системаһына ингән ведомство дауаханаларына, хатта шәхси дауаханаларға ла мөрәжәғәт итә ала. Бының өсөн ошоға тиклем хеҙмәтләндерелгән поликлиниканан күсеү һәм үҙе һайлаған учреждениела дауаланырға теләү тураһында баш табиптар исеменә ғариза яҙырға кәрәк. Әгәр һайлаған поликлиникағыҙҙа кеше күп булып, уға артыҡ көсөргәнеш тура килгәндә, етәкселек һеҙҙе үҙенә алыуҙан баш тартыуы ла ихтимал.

БР буйынса Мотлаҡ медицина страховкаһы фонды белгестәре раҫлауынса, райондарҙа теркәлеп тә, баш ҡалала йәшәүселәр был мәсьәлә буйынса күп мөрәжәғәт итә икән. Мөрәжәғәт итеүсе киҫкен ауырыу кисергәндә, уның ҡайҙан булыуына ҡарамаҫтан, сит районда ла, икенсе ҡалала ла, икенсе төбәктә лә табиптар уға бушлай медицина ярҙамы күрһәтеүҙән баш тартырға тейеш түгел, сөнки берҙәм полис бөтөн ерҙә лә үҙ көсөндә ҡала. Шулай ҙа иң яҡшыһы - һаусәләмәт булыу.

# САНАҢДЫ...

## йәй үк әҙерлә

**Ураҡ ваҡыты булһа ла, игенселәр киләһе уңышҡа ла нигеҙ һала. Бары тик техника буш ултырмаһын да, яғыулыҡ-майлау материалдарына ҡытлыҡ булмаһын.**

10 августа Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары Виктор Зубков етәкселегендә уҙған селектор кәңәшмәһендә тап ошо мәсьәлә ҡаралды ла инде. Быйыл ураҡ осоронда яғыулыҡ-майлау материалдары, былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 26 процентҡа күберәк - 2 миллион тонна талап ителә. Күпселек төбәктәр льготалы хаҡ менән бирелгән яғыулыҡ-майлау материалдарының йыллыҡ лимитын алған, бынан тыш 35 төбәк, шул иҫәптән Башҡортостан да ураҡ осорона өҫтәмә яғыулыҡ бүлеүгә заявка биргән. Республика аграрийҙары өсөн льготалы хаҡҡа яғыулыҡ-майлау материалдары алыу етди ярҙам булып тора.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Яңы уҡыу йылы башынан "Яңы исемдәр" тип аталған республика хит-парады старт ала. Проекттың маҡсаты - сағыу, һәләтле, йыр-бейеүгә маһир йәштәрҙе асыҡлау. Конкурс шарттары буйынса, хит-парадта үҙен йырсы, бейеүсе, музыкант, модельер, фотограф, модель, ди-джей итеп күрергә теләүсе 15-35 йәшлек һәр кем ҡатнаша ала.

✓Өфө 2013 йылда алтынсы халыҡ-ара ҡышҡы мәктәп уйындарын уҙғарыу урыны итеп һайланған. Ошо хаҡтағы ҡарар бер нисә көн элек кенә Шотландияның Ланаркшир графлығында Мәктәп уйындарын ойоштороу комитеты ултырышында сығарылған. Мәктәп уйындары етәкселеге июлдә Башҡортостанға килеп киткәйне. Һөҙөмтәлә беҙ 2013 йылда сағыу спорт ярыштарының шаһиты була аласаҡбыҙ, төрлө тарафтарҙан 800-ләгән спортсыны ҡаршылаясаҡбыҙ, тип күҙаллана.

✓Өфө Башҡортостандың 12 районы өсөн муниципаль-ара медицина үҙәге буласаҡ. Өфө ҡалаһы медицина округына Иглин, Благовещен, Нуриман, Шишмә, Архангел, Благовар, Бүздәк, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Саҡмағош һәм Өфө райондарының 1,5 млн кешенән торған халҡы берләштереләсәк. Был хаҡта БР Һаулыҡ һаҡлау министры Георгий Шебаев Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау өлкәһен модернизациялау программаһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә арналған сираттағы кәңәшмәлә хәбәр итте.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһының "500 бассейн" проекты буйынса Өфөлә спорт комплексы төҙөлә. Төҙөлөш быйыл мартта башланған. Ошо маҡсатҡа Рәсәй һәм республика ҡаҙнаһынан барлығы 237 миллион һум аҡса бүленгән. Биш ҡатлы спорт комплексында өс спорт залы, ике бассейн урын аласаҡ. Бынан тыш, дауалау-һауыҡтырыу үҙәктәре эшләйәсәк. Спорт комплексы октябрҙә асылырға тейеш.

✓Баш ҡалала "Формат Өфө-11" I Халыҡ-ара хәҙерге заман хореография фестивале барҙы. Сарала Англия, Испания, Чехия, Финляндиянан профессиональ һәм һәүәҫкәр бейеүселәр, хореографтар, хореографик уҡыу йорттары педагогтары һәм студенттары ҡатнашты. Европанан килгән белгестәр оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Фестиваль бөгөн, 13 августа Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Хәҙерге заман хореографияһы кисәһе" менән тамамлана.

✓ *"Талҡаҫ" санаторийын ҡышҡы осорҙа тулы көсөнә эшләтеү маҡсатында унының янында 50 урынлыҡ ҡунаҡханаһы, 800 метрлыҡ күтәреү ҡоролмаһы, 110 һәм 850 метр оҙонлоғондағы тау саңғыһы комплексы төҙөнөк.*

*ҺҮҘ - ХАКИМИӘТ БАШЛЫҒЫНА*

# ТӨП ХӘСТӘРЕБЕҘ -

## эш урындарын арттырыу



**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте 2011-2015 йылдарға Урал аръяғы райондарын үҫтереү программаһын ҡабул иткәндән һуң был төбәктә төрлө саралар планы раҫлана һәм проекттар ҡабул ителә башланы. Сараларҙың һәм проекттарҙың һаны ғына ла хәҙер 150-нән, уларҙы финанслау суммаһы 1 миллиард һумдан ашып китте. Ошо программаны тормошҡа ашырыу барышында 2011 йылда Урал аръяғының 89 объекты 530 миллион һумдан ашыу балансы булған объекттар исемлегенә индерелде. Һуңғы 5 айҙа сәнәғәт өлкәһендәге етештереүсәнлек уртаса алғанда - 6, торлаҡ төҙөлөшө 4 процентҡа артты. Ошо осорҙа Урал аръяғы райондарында һәм ҡалаларында 700 эш урыны барлыҡҡа килде, уларҙың яртыһы программа нигеҙендә тормошҡа ашырылды.**

**Программаның мөһимлеген һәм үҙ ваҡытында ҡабул ителеүен күҙ уңында тотоп, беҙ Урал аръяғы райондарының һәм ҡалаларының хакимиәт башлыҡтарын әңгәмәгә саҡырып, был мөһим башланғысҡа фатиха биреп, был биләмәләрҙә программаның үтәлеше менән таныштырып бармаҡсы булдыҡ. Тәүгеләрҙән булып Баймаҡ муниципаль районы хакимиәте башлығы Илшат Хәмит улы СИТДИҠОВҡа бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Илшат Хәмит улы, хәҙерге заманды сәнәғәтһеҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Урал аръяғы районларының иҡтисадын үҫтереү программаһында һеҙ етәкләгән, асылда, ауыл хужалығы районы һаналған Баймаҡ районында сәнәғәтте үҫтереү саралары күҙҙә тотоламы? Был йәһәттән әлеге ваҡытта нимәләр эшләнә?**

- Программа буйынса беҙҙең район территорияһында ла төҙөлөш, реконструкция эштәре алып барылырға тейеш. Мәҫәлән, 1 июлдә Баймаҡ иретеү-механика заводында 80 миллион һумлыҡ яңы марганецлы ҡорос цехы төҙөү башланды. Цехтың проект ҡеүәте - айына 170 тонна продукция. Завод етәкселеге етештерелгән продукцияның үҙҡиммәтен кәметеү, сифатын яҡшыртыу хәстәрлеген дә күрәсәк. Энергияны экономиялау маҡсатында завод 4 газ поршены ҡоролмаһы һатып алды һәм әлеге көндә уларҙы монтажлау эшен тамамлай. Предприятие етәкселеге 11ОГ13Л маркалы марганецлы ҡорос иретеүҙе үҙләштереү буйынса ҡарар ҡабул итте. Был төр ҡоростан яһалған запас частар донъяның эре сәнәғәтселәре тарафынан ҙур һорау менән файҙаланыла. Заводҡа 76 миллион һумлыҡ инвестиция талап ителә. Был сумманың 24,9 миллион һумы төҙөлөш-монтаж, 51,1 миллионы ҡоролмалар һатып алыу өсөн файҙаланыласаҡ. Ошо маҡсатта Рәсәй Һаҡлыҡ банкыһының 8598-се һанлы Башҡортостан бүлексәһе вәкилдәре менән 50 миллион һумлыҡ кредит алыу хаҡында килештек. План буйынса тәүге 150 тонна продукция 2012 йылдың июнь айында әҙер буласаҡ.

**➔ Ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары мәңгелек түгел, сөнки Ерҙең дә төбө бар. Шуға күрә һуңғы ваҡытта Урал аръяғы райондарының киләсәген туризмға бәйләү ерле юҡтан килеп тыуған фекер түгелдер. Ә бына һеҙҙең районда туризмды үҫтереү буйынса нимәләр эшләнә?**

- Ҙур кимәлдә, алыҫ перспектива менән ҡарағанда, ысынлап та, беҙҙең төбәктең киләсәге туризмға бәйле булыры бәхәсһеҙ. Шуға күрә был йәһәттән киләсәктең нигеҙен бөгөн һалыу зарурлығы бар, әлбиттә. Әлеге көндә беҙҙең район территорияһында "Граф күле" туристик базаһы һәм "Талҡаҫ" санаторийы эшләй. Киләсәктә был ике объект, минеңсә, Баймаҡ районы туристик комплексының база объекттары булырға әҙер. Шул уҡ ваҡытта, мәҫәлән, "Талҡаҫ" санаторийын ҡышҡы осорҙа тулы көсөнә эшләтеү, уны ял итеүселәр менән тулыландырыу маҡсатында унын янында 50 урынлыҡ ҡунаҡханаһы, 800 метрлыҡ күтәреү ҡоролмаһы, 110 һәм 850 метр оҙонлоғондағы тау саңғыһы комплексы төҙөнөк. Был маҡсатта 35 миллион һумлыҡ инвестиция йәлеп ителде. Тау саңғыһы комплексы 2010 йылдың аҙағында асылды.

**➔ Район халҡының ҙур бер проблемаһы - етештерелгән малсылыҡ продукцияһын һатыу. Баймаҡ районында етештерелгән ит, һөт продукттары, әле булһын, арзан ғына хаҡҡа ситкә оса. Был йәһәттән программаға ярашлы рәүештә ауыл халҡын ниндәй яңылыҡтар менән ҡыуандыра алаһығыҙ?**

- Крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы М. Хисмәтуллин әҙерләгән бизнес-план буйынса Баймаҡ ҡалаһында ит эшкәртеү предприятиеһы төҙөү күҙ уңында тотола. Проект 140 миллион 668,1 мең һумға төшәсәк. Был проект өсөн инвесторҙар табылды, проектты тормошҡа ашырыу район бюджетын һәм башҡа бөтә кимәлдәге бюджеттарҙы арттырыуға булышлыҡ итәсәк.

Программа сиктәрендә "Урал аръяғының ғаилә һөтсөлөк фермалары" проекттарын да тормошҡа ашырыу ҡарала. Тәүге этапта 4 һөтсөлөк фермаһы булдырыу күҙ уңында тотола. Әлегә 2 кандидатурабыҙ бар. Улар: Юныс Моратов КФХ-һы (ферма шәхси милеккә һатып алынған, уға реконструкция талап ителә, 25 баш һыйыр тотоу күҙ уңында тотола, барлығы 6,5 млн.һум талап ителә, бизнес-планы әҙер) һәм Радик Арғынбаев КФХ-һы (ферма төҙөү ҡарала, мал һаны - 25 баш, барлығы 8,5 млн.һум аҡса талап ителә). Күлтабан ауылында 1280 баш һыйырға һөт-тауар фермаһы төҙөү ҙә программа сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

**➔ Һуңғы ваҡытта "Ситно" компанияһының Баймаҡ районының һөрөнтө ерҙәрен ҡуртымға алып, агрохолдинг төҙөргә йыйыныуы ишетелеп ҡалды. Һуңынан асыҡланыуынса, район халҡы берҙәм рәүештә күтәрелеп сығып, был компанияға ер биреүгә ҡаршы төшкән тип ишеттек. Имеш-мимештәрҙән ҡотолоу өсөн был хәлгә үҙегеҙ аңлатма биреп үтһәгеҙ ине?**

- 2011 йылда районды барлыҡ ауыл хужалығы ҡулланылышындағы ерҙәре урындағы халыҡҡа бүлеп бирелде. Шуға күрә "Ситно" компанияһына ҡуртымға бирерлек буш ятҡан еребеҙ юҡ беҙҙең. Йыл һайын беҙҙә ауылдарҙа пайсыларҙың йыйылыштары үтеп тора. Кемгә күпме ҡуртымға ер биреү мәсьәләһен дә пайсылар хәл итә. 2011 йылдың башында пайсылар үҙҙәренә файҙалы булған шарттарҙа шул уҡ "Ситно"ға ер тәҡдим итеп тә ҡараны. Ҡаршы яҡтан компания ла күберәк үҙенең мәнфәғәтен беренсе урынға ҡуйған шарттар тәҡдим итте һәм пайсылар уларҙың тәҡдименә риза булмайынса, урындағы ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәр менән бергәләп эшләүҙе хуп күрҙе.

**➔ Илшат Хәмит улы, хәҙерге ваҡытта Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы ауылдарының иң ҙур проблемаһы - эшһеҙлек. Программа район халҡын ниндәй кимәлдә эш менән тәьмин итәсәк һуң?**

- Бик урынлы һорау. Әле беҙ юғарыла һүҙ алып барған яңы төҙөләсәк сәнәғәт, эшкәртеү, ауыл хужалығы продукцияһы етештереү объекттарының һәр береһе яңы эш урындары булдырыуҙы күҙҙә тота. Миҫалға "Талҡаҫ" күле янындағы тау саңғыһы комплексын ғына алайыҡ. Унда урындағы халыҡ өсөн өҫтәмә рәүештә 35 эш урыны барлыҡҡа килде. 35 эш урыны, тимәк, 35 ғаиләне хеҙмәт хаҡы, йәшәү сығанағы менән тәьмин итеү тигән һүҙ. Йә булмаһа, Баймаҡ ҡалаһында төҙөләсәк ит эшкәртеү предприятиеһын алһаҡ, унда ҡала халҡы өсөн 84 эш урыны барлыҡҡа киләсәк. Ҡыҫҡаһы, программала беҙҙең районға ҡағылған һәр объект мотлаҡ рәүештә урындағы халыҡты эш менән тәьмин итеүҙе лә үҙ эсенә ала.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Матур булайым, тиһәң

Әгәр тирең майлы булһа, һабынлап, эҫе һыу менән йыуын, аҙағынан 1 литр һыуға 1 сәй ҡалағы тоҙ ҡушып, ҡойоноп ҡуй.

### Аяҡ -ҡул арығанда

Йәйге оҙон көндә гел аяғөҫтө эш менән булаһың. Аяҡ-ҡулға көс төшә, шешенә, хатта көҙән дә йыйыра. Бынан ҡотолоу өсөн аяҡ -ҡулдарҙы тәүҙә 1-2 минутҡа ҡайнар (эҫе) һыуға, унан һуң 15-20 минутҡа һыуыҡ һыуға тығып тороға. Был процедура 5-6 мәртәбә ҡабатлана.

### Баш эшләмәй, тимә

Мейене әүҙем эшләтеү өсөн күберәк доға, шиғыр һ.б. ятларға кәрәк. Балалар өсөн был тағы ла яҡшыраҡ. Элекке ололар бөтә Ҡөрьәнде лә ятлаған, хәтере лә шәп булған .

### Тырнанһаң

Бигерәк тә бала-саға һыу кергәс тырнана. Бының сәбәбе төрлө була. Ҡысыуҙы баҫыу өсөн уртаса ҙурлыҡтағы бер бүлем һарымһаҡты ваҡларға, бер аш ҡалағы үҫемлек майы ҡушырға. Улар һалынған һауытты һыулы һауытҡа ултыртып, бер аҙ (1-2 м) ҡайнатып алырға, һөҙөргә. Төнәтмәне бәләкәй быяла банкаға ҡойоп ҡуйырға. Шуны төндең ҡысыған урынына һөртөргә.

### Яман шешкә ҡаршы

❖ Кәбеҫтә менән шалҡан яман шештең үҫеүен туҡтата. Үкенес, ниңәлер хәҙер шалҡан сәсмәйбеҙ. ❖ Томат - ул ир-ат йәшелсәһе: простата яман шешенән һаҡлай, тик ир-ат помидор ашай һалып бармай. ❖ Яңы һығылған сөгөлдөр һуты ашҡаҙан, эсәк, бауыр, бөйөрҙәге яман шеште иҫкәртә, йүнәлтә. ❖ Яман шештән һаҡланғығыҙ килһә, балыҡ, бигерәк тә диңгеҙ балығын ашағыҙ, улар ҡатын-ҡыҙҙы күкрәктәге яман шештән һаҡлай. ❖ Туң майҙы күп ашау яман шешкә килтереүе ихтимал. ❖ Бер үк майҙа аҙыҡты бер нисә рәт ҡыҙҙырмағыҙ һәм бешермәгеҙ: унда барлыҡҡа килгән ыҫмала яман шеш булдыра. ❖ Күберәк майһыҙ һөт ризығы, майһыҙ эремсек ҡулланығыҙ. ❖ Күгәргән ризыҡтарҙы ташлағыҙ, таҙа ерен дә киҫеп алмағыҙ, сөнки күгәргән аҙыҡ унға яҡын төрлө ағыу сығара һәм бауырҙа яман шеш тыуҙыра.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА .**

✓ *Иҫемә килеп һораһам, миңә башҡорт Ғирфанов ҡан биргән. Башҡорт ҡаны мине үлем тырнағынан йолоп алды. Ер башҡорттоҡо, ил - Башҡортостан, башҡорт теле ят түгел, бәй, шулай булғас, мин кем һуң?! - ти әңгәмәсем.*



*Аһ-Аһ!*

# ЙӘНҺҮРӘТТӘР... йәнде тәрбиәләйме?

**Сессия, имтихандар артта ҡалды. Көтөп алған каникул мәлендә ҡайһы саҡта таңға тиклем күңел асабыҙ. Билдәле инде, төшкә тиклем йоҡлайым. Шулай ҙа бер көндә иртән иртүк торҙом, телевизор ҡабыҙҙым. Бөтә каналдарҙа тиерлек йән-һүрәттәр бара. Береһенән-береһе сағыуыраҡ. Пульт төймәләрен алмаштыра-алмаштыра әллә нисә мультфильм ҡараным һәм... минең буласаҡ балаларым бындай йәнһүрәттәр ҡарамаясаҡ, тигән ҡарарға килдем.**

Заман мультфильмдарының береһе лә кескәйҙәр өсөн түгел икән. Совет замаңында сыҡҡандары, йәғни минең быуын ҡарап үҫкән йәнһүрәттәр менән 90-сы йылдарҙан һуңғылары араһында ҙур айырма бар. "Серая мышка", "Король Лев", "Кот Леопольд", "Дюймовочка", "Золушка"- улар беҙҙең быуындыҡы. Улар әхлаҡи яҡтан бик көслө. Арҙамсыллыҡ, тоғролоҡ, илһөйәрлек, дуҫлыҡ кеүек темалар ярылып ята унда. Ундай мультфильмдарҙан балалар ыңғай эмоция ала, шатлана, уларҙың кисерештәрен үҙҙәре аша үткәрә.

Әлеге мультфильмдарҙа иһә әхлаҡҡа урын юҡ. Геройҙарҙың ыңғайҙары ла, кирәләре лә йәмһеҙ, Кеше тиһән, кеше түгел, йәнлеккә лә оҡшамағандар. Телмәрҙәрендә әллә ниндәй жаргон һүҙҙәр ҡулланалар, бер-береһен кәмһетәләр. Уларҙа криминалға, үлтерешкә, талаштартышҡа ҙур урын бирелә. Бынан бер-ике йыл элек ниндәйҙер каналдан Арнольд исемле малай тураһында йәнһүрәт күрһәткәйнеләр. Унда кем ыңғай, кем кире образ икәнлеген дә айырыуы ҡыйын.

Бөтәһе лә яратып ҡараған "Три богатыря и Шамаханская царица" мультфильмын алайыҡ. Кемдең ҡасан аттың бо-таҡҡа ултырғанын күргәне бар? Ҡыҙыҡ, әлбиттә, бәхәсләшмәйем, тик ҡайһы бер геройҙарҙың әшәке, быҫраҡ, тупаҫ һүҙҙәре ололарҙы ғына түгел, кескәйҙәрҙе лә аптырата.

"Маша и Медведь" мультфильмындағы "Давай лечиться" өлөшө балаларға ниндәй тәрбиә бирә? Бына бәләкәй ҡыҙ Маша "Ашығыс ярҙам" машинаһынан клизма-эшләй торған яйлама табып ала ла, "Давай лечиться" тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлай-ҡабатлай үҙенән әллә нисә тапҡыр ҙур бүренең ҡойроғо аҫтына ынтыла. Был күренеш кескәйҙәргә ниндәй тәрбиә бирә һуң? Һуңынан, балалар ҡайҙан бөтәһен дә белә икән, тип аптыраған булабыҙ.

Бындай мультфильмдарҙың авторҙары, ата-әсәләр, балалар йәнһүрәттәрҙе күңел асыу, ваҡыт үткәреү өсөн генә ҡарамай, ә уларҙы ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә, бик күп яңы нәмәгә өйрәнә, күренештәр, аталар, һүҙҙәр менән таныша, тип уйлап ҡарағаны бармы икән. Шуға күрә мультфильм һайлағанда бик иғтибарлы булырға кәрәк, тип уйлайым. Һис юғында, йәнһүрәтте ҡарағандан һуң бала менән бергә уның тураһында фекер алышыгыҙ. "Нимә яҡшы, нимә насар" булыуы хаҡында бәхәс ҡороғоҙ. Бының өсөн, әлбиттә, мультфильмды бала менән бергә ҡарарға кәрәк. Юғиһә, ҡайһы бер ата-әсә ниндәй мультфильм икәнлеген дә белмәй, диск һатып ала ла ултыртып ҡуя балаһын телевизор алдына. Бары тик шауламаһын, ҡамасауламаһын, күҙ алдында, өйҙә генә ултырһын, тип уйлай. Тик баланың урамға сыҡмай, тиҫтерҙәре менән аралашмай ғына ултырһа ла, үрҙә атап кителгән йәнһүрәттәрҙе ҡарап, тәрбиәһеҙ, тупаҫ булып үҫеүе мөмкин.

**Мәрүәр АБДРАХМАНОВА.**

*МИН БЕЛГӘН УРЫҪ*

# БАШҠОРТ АРБАҺЫНА УЛТЫРЫП...

## башҡорт йырын йырлаусы улар

2011 МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ ГОД УКРЕПЛЕНИЯ МЕЖНАЦИОНАЛЬНОГО СОГЛАСИЯ

**(Башы 1-се биттә).**

Интернациональ ғаиләләрҙе маҡтап яҙһаҡ та, заман шауҡымына бирелеп, ҡатнаш никахтарҙы хуплаһаҡ та, миҙалдың икенсе яғы ла бар - күпселек әҙселекте йотоусан, йәғни әлеге лә баяғы мәкәл хаҡлы: кем арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлаясаҡһың! Беҙ йотоу-йотолоу түгел, берлектәге тереклек, камил үҫеш яҡлы. Ваҡыт ғали йәнәптәре, тормош үҙе ошоно иҫбатлай ҙа инде. Байлыҡ терәк түгел , берлек терәк икәнде күптән аңлағанбыҙ.

Һүҙ башым берлектә - тереклек булғайны. Беҙҙең "саф башҡорттар йәшәгән төбәк" тип нарыҡланған Бөрйәндә лә милләттәр дуҫлығы сәскә ата. Хәйер, башҡөллө крәҫтиән эшенә сумған, донъя мәшәҡәте менән ҡайнап, ябай ауыл тормошо менән көн күргән әҙәм затының милләт айырып, дин бүлеп, сығыш тикшереп ултырырға ваҡыты ла юҡ. Башҡорт - урыҫты, урыҫ башҡортто нисек бар, шулай ҡабул иткән - һәм вәссәләм!

Бөрйәндең арғы сигендә урынлашҡан Ырғыҙлы ауылында рус милләте вәкилдәре күп кенә. Уларҙың ата-бабаларының беҙҙең тарафтарға килеп сығыуы - үҙе бер айырым тарих. Һүҙ - бөгөнгө урыҫ һәм башҡорт мөнәсәбәте, милләт-ара ҡаҡшамаҫ дуҫлыҡ хаҡында.

Ырғыҙлыла башҡорттар менән бер ғаиләләй йәшәүсе байтаҡ урыҫтар бар, тинек. Мәкәләм геройҙары Симоновтар ҙа ошо матур теҙмәлә. Әңгәмә барышында ла халыҡтың һүҙе хаҡ булыуға инандым: бергә бешергән өйрә ҡуйы була шул - йорт хужаһы Николай Владимирович менән ҡатыны Наталья Георгиевна, рустар әйтә алмаған "һ" өнөн башҡортондан былай ҡушып, минең русса биргән һорауҙарға тас башҡортса яуап биреп, рус- башҡорт бергәлегенә матур баһалары менән аптыратты. Ғаилә башлығы ла, әлтәрәп торған хужабикә лә йор һүҙле булып сыҡты.

- Минең ата-бабалар был яҡтарға Ырымбур яғынан килгән. Симонсон фамилиялы бай алпауыт нәҫеленән беҙ. Ваҡыт үтә килә фамилияға ла заман шойҡаны тейгән. Беҙ Ырғыҙлылы тыуып үҫтек, хәҙер Бөрйән беҙҙең өсөн Тыуған илдән дә күберәк мәғәнәгә эйә. Беҙ бит барыбыҙ ҙа бер Хоҙай бәндәләре, Аллаһҡа табыныуыбыҙ ғына башҡаса. Тел кәртәһе юҡ - башҡортса рәхәтләнеп һөйләшәбеҙ, "Таң" гәзитен уҡып барабыҙ. Беҙ ҙә бәләкәй саҡта башҡорт балалары менән берә уйнап үҫтек, беҙҙең балаларҙың яҡын дуҫтары - башҡорттар. Ил бер, район бер, ауыл бер - беҙгә нимәне бүлешергә, йәндәр ҙә, ҡандар ҙа берләшеп бөткән.

Беҙ башҡорттоң аят ашына йөрөйбөҙ, башҡорттар беҙҙең пасхаға килә. Ауылы берҙән ҡәүеме бер, тип йәшәп ятыла инде. Ата-бабалар дин йолаларын ихласыраҡ үтәй ине, беҙ хәҙер заманға яраҡлашып бөттөк, - тип һөйләп китте Николай Владимирович.

Наталья апай еңгәһе менән сәй эсә ине. Тәҫ-башына ҡарап, мин уны башҡорт кешеһелер, тип уйланым. Ул да тас башҡортсанан һалдырып, әңгәмәгә ҡушылды:

-Горшениндар яғынан ата-бабамдар Ырымбур яғынан килгән.Ҡотан эргәһендәге Ҡыңғырҙа йәшәгәндәр, ул хутор хәҙер юҡ инде. Туленковтар яғынан туғандар Курск яғынан килгәндәр. Граждандар һуғышы мәленән ошо Бөрйән еренә ереккәндәр.Минең әкрәбәләр, Туленковтар -Баҡановтар Ҡыуаламатта йәшәгәндәр. Өсөнсө быуын туғандар Ырымбурҙа йәшәгәнен беләм, ә башҡорттар кеүек итеп оҙон тарихты һөйләй белмәйем. Минең әсәйем, Зинаида Туленкова, Ҡыуаламатта йәшәне. Унда тик башҡоттар йәшәгән Аҡбулат ауылы эргәлә генә була. Башҡорт халыҡ йырҙарын ифрат яратыр, бәгзеләрен көйләп йырлап йөрөр ине... Һуғыш осорондағы, унан һуңғы ауырлыҡтарҙы урыҫы ла, башҡорто ла бергә күтәргән бит. Ауыр йылдар ике туғандаш халыҡты тағы ла нығыраҡ берләштергән. Башҡорттар тураһында юғары фекерҙә ине әсәйем. Ноғомнов Әнүәр бабай, Постубаевтар, Ҡотандан Йәнбирҙин Миһран, Зәбир (улар 4 ағай-эне ине), Зәки, Гәзелша бабайҙар бер туғанынан артыҡ булды. Гәзелша бабай бик кешелекле кеше ине, бер ҡыуышта йәшәнек, бөтә нәмә уртаҡ булды. Хәҙер мин Гәзелша бабайҙың ҡыҙҙары менән аралашам. Мәсәлән, Гөлсиә менән коллегаларбыҙ хатта. Аслыҡ, ялыҡ осоронда диндар инәй-бабайҙарҙың былай ҙа ас килеш йәйге эҫе көндәрҙә ураҙа тотоуын аптырап һөйләр ине әсәйем. Атайым Ырғыҙлыла. Олатайым Яков Горшенин булған. Коллективлаштырыу осоронда беренсе ауыл Советы рәйесе була, һуғыш башланғас та уҙ теләге менән беренселәрҙән булып яуға китә. Үкенескә күрә, Ырғыҙлыһына әйләнеп ҡайтырға яҙмай уға...

Мин үҙем башҡорттарҙы ихлас яратам, ихтирам итәм, сөнки бөтә ғүмерем улар араһында үтте. Бер мәл ҡаты сирләнем, ҡан кәрәк булды. Иҫемә килеп һораһам, миңә башҡорт Ғирфанов ҡан биргән. Башҡорт ҡаны мине үлем тырнағынан йолоп алды. Ер башҡорттоҡо, ил - Башҡортостан, башҡорт теле ят түгел, бәй, шулай булғас, мин кем һуң?! - тип һоҡланыу ҡатыш аптырап ҡулдарын йәйә әңгәмәсем. - Башҡорттарҙың кәсепшөғөлдәрен дә үҙләштереп бөттөк: умарта тотабыҙ, мин ҡорот эшләйем, ҡоротһоҙ һурпаның ни тәме?- тип ебәрә Наталья Георгиевна.

Эйе, был ғаиләлә мөхәббәт тантана итә: тыуған ергә лә, башҡортҡа ла, урыҫҡа ла, эшкә лә. Икеһе лә Ырғыҙлы участка дауаханаһы хеҙмәткәрҙәре Симоновтар. Наталья апай 1988 йылдан дауаханала, әле палата сестраһы. Өлкән улдары Андрей әрменән һуң өйләнеп башҡа сыҡҡан. Килендәре, Светлана Константиновна Жидкова, ауылда рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта. Владимир СДПА-ла уҡый, әле сессияһын "5"-кә генә тапшырып ҡайтҡан. Спортсы егет милли көрәш менән шөғөлләнә. Мария 9-сы синыфтан һуң Стәрлетамаҡта колледжда туризм йүнәлеше буйынса уҡый. Күп итеп умарта тотоуҙары балалары уҡыған саҡта төп аҡса сығанағы.Техниканы ла бал аҡсаһына алғандар. Ҡустәр Николай Владимировичтың атаһынан мираҫҡа ҡалған. Үҙҙәренең ҡустәре әле 22 баш булһа, ҡустыһы Михаилдыҡы иһә 50 баш.Бәгзе башҡорт ҡарай алмаған бал ҡорттарын төп килем сығанағы итеп алған Симоновтар. Мал-тыуарҙары ла, ҡош-ҡорттары ла ишле. Ҡапҡа тултырып күркәләр йөрөй, йәшелсәләре лә мул уңыш бирмәксе.

Ҡыҫҡаһы, ана шундай ғаилә йәшәй Ырғыҙлыла. Хеҙмәт һөйөүсе ябай ауыл кешеләре. Ә уларҙың йәшәйештәрош, ил-көн, башҡорттар тураһында фекерҙәре бөйөк. Ябайлыҡта - бөйөклөк шул.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ИРМЕН ТИГӘН ИР...

- Бүләк биреүҙән малың, белгәнеңде өйрәтеүҙән аҡылың кәмемәй - күңелең генә биҙәкләнә.
- Дошман ужыуы утыҙ йыл, унан һуң да абай бул.
- Утын бирҙем, ҡуҙ алам тигәндәй үрһәләнмә - һәр эшеңдә, фекереңдә бөтмөрләп, семсерләп, сынъяһау итеп башҡар.
- Тәкәбберҙе төртөнсөк менән төртөндөр: кинәйәле мәҙәгеңде, айҙай балҡыған йөҙөңдө йәлләмә - майҙай ирер.
- Ирмен тигән ир ҡулында ир ҡорамалы булыр, бейек ҡәлғәләр ҡорор.
- Айран эсергә барға ин, бал теләһәң байға йүнәл.
- Тел ҡатмаҫҡа ғәзел һүҙ, күңел туңмаҫҡа изге теләк ҙур дауа.
- Һәр эштә лә өйрәтеүсе-белемсенең һаны юҡ, эшләүселәр генә иҫәпле.
- Йыл миҙгеле - дүртәү, һанаулы, ғүмер миҙгеленә иҫәп юҡ.
- Гел кҡктә осма - тигеҙ урында ла абынырһың.
- Байлыһы кәмеүҙән курҡҡан кеше - емтек һаҡлаған эткә тиң.
- Теҙелгән мәрйен тигеҙ ҙә ул, ғүмер юлы ғына ҡыйыш-мыйыш.
- Даныңа шапырынып, танау буйыңа ҡарама - соҡорға осорһоң.
- Һөйөү менән нурланмаған йөрәк - ҡый баҫҡан ташландыҡ баҡса.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР



Рәфис БАТЫРҠАЙ һүрәте.

# ШАҺИМӘРҘӘН ИБРАҺИМОВ

## (1841-1891)

**Үҙ иленән алыҫта фән, ғилем, ижад донъяһында шөһрәт ҡаҙанған башҡорттарҙан Шаһимәрҙән Мерәҫ улы Ибраһимовтың исеме һәр йәһәттән дә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Үҙ заманының киң белемле, тәрән фекерле талантлы бер эшмәкәре булараҡ ул XIX быуаттың икенсе яртыһында Төркөстандың рус һәм милли телдәрҙәге матбуғатын үҫтереүгә, ғилми баҫмаларҙы сығарыу эшен юлға һалыуға, ҡаҙаҡ, үзбәк, төркмән халыҡтарының этнографияһын өйрәнеүгә ғәйәт ҙур өлөш индерә, дипломатик хеҙмәттә һәләтле чиновник булып таныла. Иң ҡыҙыҡлыһы - Ш. М. Ибраһимов 1870 йылдарҙа үзбәк телендә Урта Азияла беренсе календарҙарҙы әҙерләп баҫтыра, ҡаҙаҡ һәм үзбәк телдәрендә сыҡҡан "Төркөстан вилайәте гәзите"нең тәүге мөхәррире була.**

Шаһимәрҙән Ибраһимов 1841 йылда Ырымбур губернаһында тыуған. Башта Себер кадет корпусында тәрбиәләнгән. Артабан хәрби кантонсыларҙың Омск ярымбатальонында тәрбиәләнеп, төрки телдәренән тәржемәсе әҙерләгә алып сыға. Хеҙмәт юлын Петропавловск ҡала идараһында тәржемәсе эшенән башлай. 1868 йылдан шунда уҡ өҫтәл башлығы (столоначальник) вазифаһын башҡара. Ошо дәүерҙә ул ҡаҙаҡ халҡының арҙаҡлы этнограф ғалимы Шоҡан Вәлиханов менән аралаша, уның ғаиләһенә яҡын мөнәсәбәттә була. Һуңынан ошо хаҡта ғәйәт ҡиммәтле иҫтәлектәр баҫтырып сығара. Шаһимәрҙәндең бер туған энеһе Шаһиморат Мерәҫ улы Ибраһимов (улар игеҙәктәр булғандыр, тигән фараз бар) шул уҡ йылдарҙа Шоҡан Вәлихановтың атаһы Сыңғыҙ солтанда хат йөрөтөүсе хеҙмәтен башҡара. 1870 йылдан алып ун бер йыл буйы Ташкентта Һырдарья өлкә идараһында һәм Төркөстан генерал-губернаторының канцелярияһында фарсы һәм төрки телдәренән тәржемәсе булып тора. Шаһиморат Ибраһимов, үкенескә күрә, бик иртә - 1870 йылдың 3 февралендә үлеп ҡала.

Шаһимәрҙән Ибраһимов та 1870 йылда Ташкентҡа күсә һәм, энеһе кеүек үк, Төркөстан генерал-губернаторы канцелярияһында фарсы һәм төрки телдәренән тәржемәсе булып урынлаша. Ошо ваҡыттан алып уның төрлө йүнәлештәрҙә емешле ғилми-ижади эшмәкәрлеге башлана. Уны алфавит, үзбәк телендә уҡыу китаптары, типография мәсьәләләре буйынса төрлө комиссияларҙың эшенә ылыҡтыралар, хеҙмәттәге йомоштарын үтәп, ул Петербургта, Фирғәнә өлкәһендә була, 1875 йылда иһә ялан штабының тәржемәсеһе сифатында Коканд походында ҡатнаша. Ш. М. Ибраһимов күп телдәрҙе белеүе, урындағы халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәтен, психологияһын бик тәрән аңлауы, киң ҡарашлылығы менән Урта Азия һәм Рәсәйҙең дәүләт идараһы даирәләрендә ҙур абруй ҡаҙана. 1870-1878 йылдарҙа ул, алда әйткәнебеҙсә, ҡаҙаҡ һәм үзбәк телдәрендә нәшер ителеп, был ике халыҡтың матбуғат һәм ижтимағи фекер үҫеше тарихында мөһим урында торған "Төркөстан вилайәте гәзите"нең мөхәррире була. Был йылдар уның үҙ биографияһында ла (бигерәк тә ғилми-ижади) ғәйәт әһәмиәтле бер осорға әйләнә. 1878 йылдың 1 июлендә Ш. М. Ибраһимов Төркөстан генерал-губернаторы эргәһендә дипломатия хеҙмәтенең өлкән чиновнигы вазифаһына тәғәйенләнә. 1879 йылда сираттағы ял ваҡытында Германияға, Францияға барып ҡайта. 1880, 1881 йылдарҙа рустарҙың Бохараға ебәрелгән илселегенә етәкселек итә. 1882 йылдың 12 октябрендә, үҙенең һорауы буйынса, Ш. М. Ибраһимов хеҙмәттән бушатыла, әммә оҙаҡламай Төркөстан генерал-губернаторы канцелярияһының штаттан тыш чиновнигы итеп раҫлана.

Шаһимәрҙән Ибраһимовтың биографияһында, бер яҡтан үкенесле булһа ла, бик фәһемле бер ваҡиға бар. 1885 йылда уны халыҡ мәғарифы ведомствоһы буйынса файҙаланыу хаҡында мәсьәлә күрелә. Әммә был тәҡдимдәр билдәле миссионер Н. И. Ильминскийҙың ҡәтғи ризаһыҙлығын тыуҙыра. Ул инде изге Синодтың обер-прокуроры К. П. Победоносцев исеменә хат яҙа. Хатта әйтелеүенсә, Шаһимәрҙән Ибраһимов үҙен ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, телдәрҙе яҡшы белеүсе эшлекле дипломат итеп таныта, шуның өсөн дә уны халыҡ мәғарифы эшенә йәлеп итеү хәүеф тыуҙыра. Шуның өсөн дә ул Рәсәйҙә лә, Урта Азияла ла, Ҡаҙаҡ далаһында ла бик күп кешеләр менән таныш, бөтөн мосолман илдәренең, халыҡтарының һәм хөкүмәттәренең булмышын яҡшы белә, рус телендә һөйләшеү һәм яҙыу оҫталығы менән тап ҡалдыра, мәғрифәтселекте, кәрәк икән, либераль идеяларҙы күтәреп алырға әҙер тора, мөғәмәлә итеү һәм үҙ-үҙен тота белеүе, ҡыйыулыҡ, теләһә кем алдында ла дәрәжәһен төшөрмәү менән айырылып тора. Ниндәй шәп характеристика! Әммә бөтөн парадокс бына шунда: нәҡ ошондай сифаттары өсөн Шаһимәрҙән Ибраһимовты көнсыгыш халыҡтарының мәғариф эшенә ылыҡтырмау сараһы күрелә лә инде. Мәкер ҙә, хәйлә лә булған шул колониаль сәйәсәттә.

Ш. М. Ибраһимовтың этнография өлкәһендәге тәүге хеҙмәте 1870 йылда "Туркестанские ведомости" тигән баҫмала донъя күрә. Был - уның тарафынан яҙып алынған 103 ҡаҙаҡ мәҡәле. 1871 йылда ул Оло Урҙа ҡаҙаҡтары араһында йыйған йомаҡтарын һәм яуаптарын, шул уҡ йылда Ҡаҙаҡ далаһындағы муллалар тураһындағы мәҡәләһен баҫтыра.

1872 йылда Ш. М. Ибраһимовҡа Коканд ханының өлкән улы Хан-Заҙәнең тәржемәсеһе сифатында Ташкенттан алып Кокандҡа тиклем сәйәхәт итеү насип була. Юлда ул көндәлек алып бара, аҙаҡ шуның өҙөктәрен баҫтырып сығара. Был юлъяҙма шулай уҡ этнографик характерҙағы күҙәтеүҙәргә бай булыуы менән әһәмиәт ҡаҙана. Шул уҡ йылда баҫылған "Кырғыҙҙар. Этнографик очерк" (хәҙергесә: "Ҡаҙаҡтар...") тигән хеҙмәте ҡаҙаҡ халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, ҡалым, ҡыҙ әйтереү, ҡыҙ менән егетте йәрәштереү, туй йолалары, бала тыуыу, баланы һаҡлау менән бәйле йолаларҙы бик ентекләп теркәүе менән етди ғилми әһәмиәткә эйә. 1874 йылда Ш. М. Ибраһимовтың Хиуа төркмәндәре һәм ҡырғыҙҙары тураһындағы хеҙмәте донъя күрә. Дөйөм алғанда, уның үҙе иҫән саҡта баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре ике тиҫтәнән артып китә. Шәхси архив материалдары Үзбәкстандың Үҙәк дәүләт архивында һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Санкт-Петербург бүлексәһендә һаҡлана.

1890 йылда Шаһимәрҙән Ибраһимов Жиддә ҡалаһына (хәҙерге Сәғүд Ғәрәбстаны) Рәсәйҙең генераль консулы итеп тәғәйенләнә. Үкенескә, 1891 йылдың йәйендә Жиддәгә барған юлда ваба ауырыуынан ваҡытһыҙ вафат була.

Оло талант эйәһе, күренекле мөхәррир һәм этнограф, яҡташыбыҙ һәм милләттәшебеҙ Ш. М. Ибраһимовтың ваҡиғаларға бай тормошон, ғилми мираҫын һәм мәҙәни эшмәкәрлеген башҡорт ғалимдарына ла ентекләп тикшерергә, хеҙмәттәрен үҙебеҙҙә баҫып сығарыу хәстәрлеген күрергә бик ваҡыт. Ундай шәхестәр, ысын мәғәнәһендә, халҡыбыҙҙың милли ғорурлығы, башҡорт рухиәтенең күркәм күренеше.

**Рәшит Шәкүр.**
**"Арҙаҡлы башҡорттар" китабынан.**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!



# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ

Батша хөкүмәте тарханлыҡ институтын, уның хоҡуҡтарын нисек бөтөрөп ҡуймаһын, тархандарҙы нисек кенә лә урыҫ дворяндары ҡатарына индерергә теләмәһен, кисәге тарафдарҙаштарының теләге менән күпмеләр иҫәпләшергә лә мәжбүр. Элекке тархандарҙың ил алдында ҙур хеҙмәт күрһәткәндәре, иң абруйлылары, кантон башлыҡтарының күренеклеләре өҙләкһеҙ юллауҙары буйынса яйлап берәм-һәрәм дворянлыҡҡа күсерелә башлай.

Башҡорт дворяндары тарихы Екатерина II батшабикәнең 1785 йылда сығарылған Рәсәй Дворянлығы хаҡындағы указы нигеҙендә асыла. Был указ буйынса дворянлыҡ исемен биреү йә мәхрүм итеү хоҡуғы губерна дворян депутатлығы йыйылышы ҡарамағына тапшырыла. Ырымбур губернаһы дворяндары кенәгәһенә ҡарағанда, 1793 йылда башҡорттарҙан беренсе башлап дворянлыҡҡа Күсәрбай һәм улы Аралбай Аҡсулпанов теркәлә. Шул ваҡыттан алып XIX быуаттың ҡырҡынсы йылдарына тиклем дворяндар нәҫел-тоҡомо кенәгәһенә бары 19 башҡорт дворян заты индерелә. Улар Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән юғары дәрәжәле чиновниктар йәки кантон башлыҡтары ғына. Башҡорт дворяндары династияһын барлыҡҡа килтергән затлы фамилиялар шулар: Аҡсулпановтар, Собханғоловтар, Бакировтар, Ҡаюповтар, Кейековтар, Моратовтар, Мусиндар, Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Тутаевтар, Йәһүдиндәр, Мәксүтовтар, Янышевтар; шулай уҡ шәхси дворянлыҡты алған Ишмөхәмәт Сөләймәнов, Абдуллатиф Ғәмбәров, Ғисматулла Ҡайсаров, Мөхәммәткәрим Монасипов, Яҡуп Юнысов. Быларға тағы һуңыраҡ башҡорт Нуғайбәковтар, Рафиҡовтар, Өмөтбаевтар, Ҡотлобаевтар, Ибраһимовтар династияһы ялғана. Былар араһында дворянлвгк дәрәжәһе нәҫелдән нәҫелгә күсер кантон башлыҡтарынан бигерәк тә Ҡыуатовтар, Солтановтар, Сыртлановтар, Өмөтбаевтар, Ибраһимовтар, Ҡаюповтар династиялары ил һәм башҡорт халҡы алдында ҙур абруй ҡаҙана.

Профессор Рим Янғужин башҡорт йәмғиәтенең юғары социаль ҡатламдары хаҡындағы бер мәҡәләһендә 1850 йылда башҡорттарҙан 590 дворян булған тигән һан килтерә. 1840 йылдарҙың урталарында 19 ғына башҡорт дворяны булып, дүрт-биш йыл эсендә (1850 йылда) был һандың 590-ға етеүе шик тыуҙыра. Беҙҙеңсә, 590 һанына башҡорт дворяндары ғына түгел, уның тархандары һаны ла ингәндер, моғайын. Ә бына ошонан һуң, 1851 йылдан 1865 йылға тиклем, йәғни ун биш йыл буйына бер генә башҡорт башлығы йәки затлы ғаиләһе дворян дәрәжәһе ала алмауы был шикте тағы көсәйтә. Йәғни Рәсәй хөкүмәте, уның губернаторҙары сит милләттән һәм икенсе дин вәкилдәренән дворянлыҡҡа кандидатураларҙы берәмтекләп кенә һайлап алыр булғандар. Рәсәй иле алдында күрһәткән ҙур хеҙмәттәре һәм аҡ батшаға тоғролоҡтары был һайланышта төп үлсәм (критерий) һаналған.

Рәсәйҙең башҡорттар хаҡындағы 1863 йылдың 14 май положениеһында ғына башҡорт дворяндары урыҫ дворяндары менән тиң хоҡуҡлыҡ законлаштырылған. Шәхси дворянлыҡ дәрәжәһен һәм хоҡуғын бөтә ғаиләгә, нәҫелдән нәҫелгә күсереү нығытылған. Шул йәһәттән ҡарағанда, 1897 йылғы бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә Өфө губернаһында башҡорт ғаиләләре эсендә - 512 йән, Ырымбур губернаһында - 452 йән кеше дворян заты тип исемләнгән.

Ҙур түрә һәм хәлле башҡорт дворян ғаиләләре XIX быуатта, XX быуат башында затлы урыҫ дворяндары һәм эре помещиктары менән ярышырлыҡ күп ергә һәм мөлкәткә эйә булғандар. XIX быуат аҙағында башҡорт дворяндарынан Өфө губернаһында 303, Ырымбур губернаһында ла шунса эре хужалыҡ яҡшы билдәле. Бәләбәй өйәҙендә Солтановтар, Бөрө өйәҙендә Ҡотлобаевтар бик ҙур ерҙәр биләгән, ҙур байлыҡ, мөлкәттәргә хужа булған.

Нәҫелдән нәҫелгә күскән башҡорт тархандары һәм дворяндары династияһынан бик күп уҡымышлы кешеләр, дәүләт, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғәскәр башлыҡтары, ғалимдар, дин әһелдәре, сәнғәт, мәҙәниәт, мәғрифәт өлкәһендә етәксе, һәләтле шәхестәр күп сыҡҡан. Быға беҙ, ғалимдар, уларҙың нәҫел-нәсәптәре юллап, затлы династия кешеләре икәнлеген асыҡлап ҡараманыҡ. Рухи мираҫыбыҙға, затлы нәҫелдәргә синфи күҙлектән ҡарау һәм шул нөктәнән инҡар итә килеү был эшкә ҡамасаулыҡ яһаны. Хәҙер беҙгә башҡорт тархандары, дворяндары династияларын ныҡлап өйрәнергә һәм уларҙың тыуған ил, туған халҡы алдындағы оло хеҙмәттәрен күрһәтергә бик ваҡыт.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**яҙыусы, профессор.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Аҙағы. Башы 32-се һанда).**

(Аҙағы. Башы 32-се һанда).

**✓ Башҡорттарҙың Рәсәй менән берләшеүен 1557 йылға ҡайтарып ҡалдырыу ҙа ысынбарлыҡҡа тура килеп үк бөтмәй. Мин был датаны яңы династияның килеүенә бәйле XVII быуаттың башына бәйләү яғындамын.**

# Көслөгә һыйыналар,

## йәки Халҡыбыҙ тарихына

**Телевизор экранында билдәле тележурналист, тарихсы, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Салауат Хәмиҙуллиндың башҡорт тарихы хаҡындағы сираттағы тапшырыуы бара. Автор килтергән дәлилдәр тамашасыны йөҙ проценты менән тиерлек ышандырыу көсөнә эйә, сөнки уның тапшырыуҙары фәҡәт тарихи сығанаҡтарҙан, мотлаҡан рәүештә тарихи документтарға таянылған анығ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ факттарҙан ғына тора. Буш һүҙ һөйләнмәй, тарихи факт һәм документ менән нығытылмаған фекер әйтелмәй Салауаттың тапшырыуҙарында. Уларҙы ҡараған һәм тыңлаған һайын аң балҡышы, күңел байрамдары кисерәһең, үҙеңдең ошо халыҡтың бер улы, ҡыҙы булыуың менән ғорурланаһың.**

**Тарихсы тележурналистың тамашасыға тәьҫир көсө хаҡында уйланғанда тик бер генә һүҙбәйләнеш тел осона килә: милли рух менән һуғарылған тарихи хәҡиҡәт. Дөрөҫ, тарихи факттарҙы төрлө маҡсатта ҡулланырға була, ә Салауат беҙгә һөйләгән тарихи хәҡиҡәт милләтебеҙҙең рухын күтәреүгә, үҙ булмышыбыҙға туп-тура ҡарарға, асылыбыҙҙы йәнебеҙ менән тойорға булышлыҡ итә. Быныһы инде иң мөһимелер. Түбәндәге әңгәмәһендә Салауат ХӘМИҘУЛЛИН халҡыбыҙ тарихының иң һынылышлы мәлдәре хаҡында үҙенсәлекле фекер йөрөтә.**

### Империялар солғанышында

Һуңғы меңъйыллыҡта Евразия ҡитғаһында бер-бер артлы төрлө империялар барлыҡҡа килгән, йәшәгән, юҡҡа сыҡҡан, уларҙы икенселәре алыштырған. Башҡорттарҙың айырым ырыу-ҡәбиләләре шул империяларҙың бер өлөшөн йә ядроһын тәшкил иткән. Әйтәйек, башҡорттарҙың боронғо дәүләттәрен Хазар, Енисей ҡырғыҙҙары дәүләттәре менән бер рәткә ҡуйырға була. Һәр хәлдә, башҡорттарҙың дәүләт төҙөү тәжрибәһе элек-электән булған һәм күп кенә башҡорттар дәүләттәр менән хакимлыҡ иткән. Миҫалға Хазар дәүләтенең ҡағаны Басжуртты ғына алайыҡ. Әлбиттә, ҡағандың ысын исеме аты билгеһеҙ, Басжурт ҡәүем атамаһынан алынған. Быларҙан тыш, Иҙрисиҙың яҙмаларында ла Намжан тигән башҡорт ҡалаһында йәшәүсе һәм хакимлыҡ итеүсе хан тураһында мәғлүмәт алабыҙ.

Күп кенә халыҡтар Алтын Урҙа дәүерендә генә формалаша. Әйтәйек, ҡаҙаҡтар менән үзбәктәр. Ҡаҙаҡ атамаһы полиэтнонимдан алынған, ҡаҙаҡтар үҙҙәре Дәште-Ҡыпсаҡ үзбәктәрен тәшкил итеп, XV быуатта үзбәк ханлығынан айырылып китеп, Алтын Урҙа хандарын танымаусы ҡаҙаҡ урҙаһын барлыҡҡа килтерә. Ә үзбәктәр Алтын Урҙаның төп күсмә ҡәүемен тәшкил иткән. Аҙаҡ ҡаҙаҡ полиэтнонимы этнонимға әүерелә. Һуңынан ҡаҙаҡ ханлығы барлыҡҡа килә, ул Рәсәй составына инә. Совет осоронда Ҡаҙаҡ ССР-ы формалаша, СССР тарҡалғандан һуң мираҫҡа Ҡаҙағстан тороп ҡала. Ҡаҙаҡтарҙан айырмалы рәүештә, Башҡорт этнонимы боронғо дәүерҙәрҙән алып боронғо айырым ҡәүемдең атамаһын аңлатып килә. Башҡорттар Алтын Урҙа составына, боронғо яҙмалар буйынса "государь всея Баскардия" етәкселегендә инә. Был факт нимә тураһында һөйләй? Башҡорттар Алтын Урҙа составында үҙ кенәзлектәре менән урыҫ кенәзлектәре кеүек үк был империяның вассалдары булып торған, тимәк. Башҡорттар Үзбәк ханға административ яҡтан ғына буйһонған, халыҡ буларак, үзбәктәр составына инмәгән. Үзбәк халҡы ла тап шул осорҙа формалаша. Тарихта киң билдәле Үзбәк хан үҙ биләмәһендәге төрки һәм монгол сығышлы ҡәбиләләргә Ислам динен индерә һәм яңы формалашҡан ҡәүем уның исемен йөртә башлай. Аҙаҡтан ҡайһы бер үзбәк ырыуҙары башҡорттарға ла килеп ҡушыла. Ундайҙарға мең ырыуын индерергә була. Шуға күрә мең ырыуы хәҙерге ваҡытта үзбәктәрҙә һәм башҡорттарҙа ғына һаҡланған.

Үкенескә ҡаршымы, бәхеткә күрәме, Алтын Урҙа империяһы тарҡала һәм юҡҡа сыға. Уның тарҡалыуында нуғайҙар төп ролде уйнай. Сыңғыҙ хандың ике ҡитғаны үҙ ҡулында тотоу тәжрибәһен Иван Грозный үҙ ҡулына ала һәм Алтын Урҙанан һуң ҡалған ике ҡитға биләмәләре Рәсәйгә күсә. Евразия ҡитғаһында барлыҡҡа килгән вакуумды рус батшаһы тултыра. Рустар 50 йыл эсендә Мәскәүҙән Сахалинға, Камчаткаға тиклем барып етә.

### Башҡа сара булмағанмы?

Тарихи күҙлектән ҡарағанда, башҡорттарҙың Мәскәү кенәзлеге менән берләшеүе башҡа сара ҡалмағанға күрә яһалған аҙым була. 1731 йылда ҡаҙаҡтың Әбелхайыр ханы рус подданствоһын ҡабул итеүе лә ҡаҙаҡтар өсөн файҙаға ғына була. Әгәр ҙә Әбелхайыр хан был юлға бармаған булһа, бөгөн Ҡаҙағстан дәүләте булмаҫ ине, ҡаҙаҡтар нуғайҙарҙың хәленә ҡалған булыр ине. Нуғайҙарҙың һаны XV быуатта 1 миллион кешене тәшкил итһә, бөгөн улар 70 мең генә. Ул саҡта рустар 5 миллион самаһы булған. Ваҡытында ике ҡитғаны дер һелкеткән иҫәпһеҙ-һанһыҙ нуғайҙарҙың бөгөн дәүләте юҡ. Әгәр ҙә нуғайҙар дөрөҫ юлды һайлаһа, бөгөн 100 миллион самаһы булырҙар ине. Нуғайҙарҙың һәләкәтле позицияһы Алтын Урҙаны тарҡатыуға йүнәлдерелгән эшмәкәрлегенә бәйле. Был йәһәттән Әбелхайыр хан ҡаҙаҡ халҡының киләсәге өсөн баһалап бөткөһөҙ роль уйнаған шәхес һанала.

Әбелхайыр хан рус подданствоһын ҡабул иткәндән һуң Ырымбур экспедицияһы ойошторола. Уның һөҙөмтәһендә нуғайҙар киткәндән һуң икһеҙ-сикһеҙ киң далалағы бушап ҡалған башҡорт ерҙәре ҡаҙаҡтар ҡарамағына күсә. Иҙриси картаһынан күренеүенсә, Тышҡы башҡорт ерҙәре Эльба тамағына, Каспий, Арал диңгеҙҙәренә тиклем һуҙылған була. Шулай итеп, ҡаҙаҡтарҙың рус подданствоһын ҡабул итеүе арҡаһында башҡорттар хәҙерге көнбайыш Ҡаҙағстанға ҡараған ҙур ерен юғалта. Ҡаҙаҡ ССР-ы барлыҡҡа килеүе лә, асылда, башҡорт милли хәрәкәте ҙур роль уйнай. Ҡаҙаҡ интеллигенцияһы формалаша, далала ҡалалар ҡалҡып сыға, сәнәғәт үҫешә, ҡаҙаҡтарҙың дәүләтселегенә нигеҙ һалына һәм ошоларҙың барыһында ла башҡорттарҙың үҙ азатлығы өсөн көрәше йоғонто яһай. Һәр хәлдә, башҡорттар үҙҙәре күп ерҙәрен, халҡының ҙур өлөшөн юғалта, бынан файҙаны күберәк ҡаҙаҡтар күрә.

Рус батшалығына йөҙ бороу берҙән-бер сара булғанмы башҡорттар өсөн? Ни өсөн башҡорттар фәҡәт ошо юлға барырға мәжбүр булған һуң? Ниңә улар башҡа ханлыҡтар менән берләшеп, уртаҡ дошманға ҡаршы көрәшмәгән? Бында тағы ла бик күп һорауҙар теҙергә мөмкин булыр ине. Башҡорттарға Мәскәү дәүләтселеге менән берләшеүҙән башҡа сара ҡалмай. Сөнки Ҡаҙан яулана, Себер, Әстерхан ханлыҡтары ҡыйратыла. Рус подданствоһын ҡабул иткән нуғайҙар араһында үҙ-ара тартҡылаш китә. Ҡалмыҡтар килеүгә нуғайҙар Кавказға һәм Ҡырымға ҡасып китә. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорттар ошондай шарттарҙа яңғыҙы тороп ҡала. Башҡорттарҙың Рәсәй менән берләшеүен 1557 йылға ҡайтарып ҡалдырыу ҙа ысынбарлыҡҡа тура килеп үк бөтмәй. Мин был датаны яңы династияның килеүенә бәйле XVII быуаттың башына бәйләү яғындамын. Сөнки әле лә һаҡланған грамоталарға Иван Грозныйҙың ҡултамғаһы түгел, Михаил Романовтыҡы һәм уның улы Алексей Романовтыҡы ҡуйылған.

### Бөрйәндәр

Башҡорт этносы формалашыуында бөрйәндәр ҙур роль уйнай. Бөрйәндәрҙең башҡорт халҡы барлыҡҡа килеүенә тиклем меңәр йыллыҡ тарихы, бер нисә дәүләтселеге була. Улар тәүҙә Уралда, аҙаҡ Кавказда йәшәй. Урал менән Арал араһындағы хәҙерге урта һәм төньяҡ Ҡаҙағстан ерҙәрендә Алания дәүләтселеге составындағы бөрйәндәр һуңынан төньяҡ Кавказға күсә. Мин Турбаслы мәҙәниәтен дә бөрйәндәр менән бәйләү яғындамын. Тарихсы Флорид Сөнәғәтов Турбаслы мәҙәниәтен төньяҡ Кавказдан ниндәйҙер ҡәүемдең күсеп килеүе менән бәйләй. Мин ул ҡәүемде бары тик бөрйәндәр тип иҫәпләйем. Шуға күрә бөрйәндәрҙең икенсе тапҡыр был яҡҡа килеүен Турбаслы мәҙәниәте формалашыуы тип тә атарға була. Әле тикшереүҙәр алып барылған "Өфө-II" ҡаласығының сәскә атыуын бында бөрйәндәрҙең килеүе менән аңлатып була. Ғәрәп сығанаҡтарында ла Дунай болғарҙары шул уҡ бөрйәндәр тип әйтелә. Аҙаҡ Алтайҙан төрки ҡәүемдәр килгәс, бындағы бөрйәндәр менән ҡушылып, башҡорт этносы ойоша башлай тип иҫәпләргә була. Кем белә, бәлки, ул саҡта бөрйәндәр үҙҙәре лә төрки телле булғандыр. Һәр хәлдә, башҡорт теленең үҙенсәлекле "ҙ", "ҫ", "һ" өндәре Алтайҙан бында күсеүсе ҡәүемдәр менән килмәгән, уларҙы бында бөрйәндәр алып килгән булырға тейеш.

Бөрйәндәр - көнсығыш Европа далаларының, Урал тауҙарының автохтондары. Сөнки улар башҡорт этносы ойошҡанға тиклем был яҡтарҙа йәшәгән.

> ***Әле тикшереүҙәр алып барылған "Өфө-II" ҡаласығының сәскә атыуын бында бөрйәндәрҙең килеүе менән аңлатып була. Ғәрәп сығанаҡтарында ла Дунай болғарҙары шул уҡ бөрйәндәр тип әйтелә. Аҙаҡ Алтайҙан төрки ҡәүемдәр килгәс, бындағы бөрйәндәр менән ҡушылып, башҡорт этносы ойоша башлай тип иҫәпләргә була. Кем белә, бәлки, ул саҡта бөрйәндәр үҙҙәре лә төрки телле булғандыр. Һәр хәлдә, башҡорт теленең үҙенсәлекле "ҙ", "ҫ", "һ" өндәре Алтайҙан бында күсеүсе ҡәүемдәр менән килмәгән, уларҙы бында бөрйәндәр алып килгән булырға тейеш.***
> ***Бөрйәндәр - көнсығыш Европа далаларының, Урал тауҙарының автохтондары. Сөнки улар башҡорт этносы ойошҡанға тиклем был яҡтарҙа йәшәгән.***

Шуға күрә бөрйәндәр үҙҙәрен ошо ерҙең хужаһы тип иҫәпләй. Юрматылар ҙа автохтон ҡәбилә һанала, мин уларҙы сарматтар тарихы менән бәйле рәүештә ҡарайым. Сөнки боронғо Рим телендә "сармат" һүҙе "сюрмат" тип әйтелә. "Сюрмат" менән "юрматы" бер үк һүҙ тип әйтергә урын ҡала бында. Әхмәтзәки Вәлидиҙең башҡорттарҙың иң сафы бөрйәндәр тип иҫәпләүе лә бөрйәндәрҙең үҙҙәрен был ерҙә нисек тотоуына бәйле тыуған фекерҙер тип уйланыла. "Урал батыр" эпосын ижад итеүсе лә бөрйәндәр тип иҫәпләргә була. Быны эпостың һинд-иран мифологияһына бәйле ижад ителеүенән сығып аңлатырға мөмкин. Ә ул ваҡытта һинд-иран традицияларын кемдәр үҙаңында йөрөткән? Әлбиттә, был бәхәсһеҙ, улар - бөрйәндәр. Мөхәмәтша Буранғоловтың "Урал батыр" эпосын бөрйән ырыуының Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәренән яҙып алыуы ла осраҡлы хәл-күренеш түгел. Минеңсә, тәүҙә бөрйән ҡәүеме эпосы булып йөрөгән эпос һуңынан башҡорт халҡының рухи ҡомартҡыһына әүерелә. Бында ғәжәпләнерлек бер нәмә лә юҡ.

### Суперэтнос

Башҡорт милләте бик күп ырыуҙарҙан торған суперэтоносты тәшкил итә. Милләт составына ингән теге йәки был ырыуҙың Ер шарының теге йәки был төбәгендә ҡандаш милләте йә дәүләте бар. Урынлы һорау тыуа: ниндәй көс һәм ниндәй шарттар ул ырыуҙарҙы үҙ төбәгенән айырып, Уралтауҙа ойошҡан ҡәүемгә алып килеп ҡушҡан һуң? Улар башҡорт халҡына ҡушылырға мәжбүр булғанмы, мәжбүр ителгәнме, әллә был хәл ирекле рәүештә килеп сыҡҡанмы? Был һорауҙарға яуап бирер өсөн кәмендә башҡорт халҡының этногенезы - килеп сығышы хаҡында оло хеҙмәт яҙырға кәрәк булыр ине. Минеңсә, башҡорт - этноним ғына түгел, бер үк ваҡытта полиэтноним да, йәғни төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереүсе политик термин. Тап ошо сифатына ҡарап, башҡорттоң суперэтнос икәнлеге иҫбатлана. Ысынлап та, күп кенә үҙаллы көслө ырыуҙарҙы, ҡәбиләләрҙе ниндәй көс башҡорттарға ҡушылырға мәжбүр иткән һуң? Миҫалға һалйоттарҙы ғына алайыҡ. Алтын Урҙала һалйоттар күп өҫтөнлөктәргә эйә ҡәбилә һаналған. Улар Сыңғыҙхан ырыуы менән ҡандаш. Әммә улар ике ҡитғаны яулаған Сыңғыҙ хандың туғандары булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт милләтен ҡабул итә. Бынан шул күренә: башҡорт булып аталыу ул ваҡытта оло ғорурлыҡҡа, ҙур аб-

✓ ***Бөтә бөлә үҙебеҙҙең урындағы ғалимдарҙың һәм чиновниктарҙың фекерләү инерцияһында. Кемдәргәлер Нияз Мәжитовтың бар донъяға яһаған был сенсацияһы оҡшап етмәй, көнләшеү тойғоһо ла ҡамасаулайҙыр бында.***



руйға тиңләнгән, тимәк. Тап ошондай уҡ формула буйынса Алтын Урҙаның нигеҙен тәшкил иткән ырыу-ҡәбиләләр үҙҙәре монгол булмаған хәлдә лә үҙҙәрен монгол тип атай башлаған. Көслөгә генә һыйыналар, көсһөҙҙән иһә, тайшаналар. Шундайын затлы, аҫыл тамырлы ырыу-ҡәбиләләр башҡортлоҡто үҙҙәре теләп ҡабул итеп алғас, ул заманда башҡорт булыуы оло мәртәбәгә тиңләнгәнен аңлауы ҡыйын түгел.

Һалйоттар ғына түгел, Алтын Урҙаның алтын бағаналары һаналған ниндәй ҡеүәтле һәм киң тармаҡлы табын, мең, меркет ырыуҙары ла башҡорт милләтенә күсә, уның телен, йолаларын үҙ итә. Рәшид әд-дин монгол булмаған ырыу-ҡәбиләләрҙең ни өсөн үҙҙәрен монгол тип атай башлауы хаҡында яҙып ҡалдырған. Рим тарихсылары ни өсөн күп кенә сармат ырыуҙарының аландарға күсеүен бәйән иткән. Ә бына башҡорттарға ҡағылған бындай хәл-күреһеберһетелеп йәшәгән күптәр тап ошо ерҙәге башҡорт халҡына килеп яҡлау һәм тулы ҡанлы тыныс йәшәйеше өсөн шарттар тапҡан. Башҡорт илендә ҡол биләүселек булмаған. Башҡорт илендә ерле ирекле кешеләрҙе аҫаба, Кавказда үҙҙән (узден) тип атағандар. "Үҙҙән" һүҙенең нигеҙендә "үҙ" тамыры ята. Үҙҙән, тимәк, үҙаллы, бер кемгә лә буйһонмаған кеше. Чечендарҙа "Барлыҡ чечендар ҙа үҙҙәндәр" тигән әйтем дә бар хатта.

Ошоларҙан сығып ҡарағанда, күп кенә ҡеүәтле ырыу-ҡәбиләләрҙең башҡорттарға килеп ҡушылыуының нигеҙендә юғарыла һанап үтелгән сәбәптәр ҙә яталыр. Күптәр беҙгә яҡлау, лайыҡлы тыныс тормош эҙләп, үҙ төбәктәрендәге ҡоллоҡтан ҡотолор өсөн килгән. Һуңғараҡ осорҙа башҡорттар крепостнойлыҡ ҡоллоғонан ҡасҡан рус крәҫтиәндәрен дә, суҡындырыуҙан ҡасҡан татарҙарҙы ла ошо уҡ принцип буйынса ҡабул иткән.

йөрөтөлә башлаясаҡ. Әле Өфө-II ҡаласығы буйынса Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәреү ҙә беҙҙең алда торған бурыс.

Эш бына нимәлә: Рәсәй һәм донъя ғалимдарының береһе лә Өфө урынында боронғо Башҡорт ҡалаһы торғанлығын инҡар итмәй, киреһенсә, улар тарихи хәҡиҡәтте яҡлап сығыш яһай. Бөтә бөлә үҙебеҙҙең урындағы ғалимдарҙың һәм чиновниктарҙың фекерләү инерцияһында. Кемдәргәлер Нияз Мәжитовтың бар донъяға яһаған был сенсацияһы оҡшап етмәй, көнләшеү тойғоһо ла ҡамасаулайҙыр бында. Ҡайһы берәүҙәр ҡаласыҡта тикшереү алып барыусы ғалимдар Нияз Мәжитовтың, Флорид Сөнәғәтовтың, Әлфиә Мәжитованың ҡаласыҡта табылған ҡомартҡыларға бәйле факттарҙы күпертеп, үҙгәртеп дәлилләүҙә ғәйепләй. Ә бына тарихсы-археолог Кызласов иһә, киреһенсә, уларҙың факттар менән үтә һаҡ итеүҙәре түгел, ә Башҡорт иле күрһәтелгән. Ә бит шул йылда төҙөлгән картаны яңынан эшләп булмай һәм уның шартлы билдәләре илде түгел, ҡаланы белдерә. Был дәғүәне ишеткән теге ғалим тағы ла тәтелдәүен белә: имеш, картаны төҙөүсе тап Башҡорт географик атамаһы төшөрөлгән урынды төшөргәндә йоҡлап киткән дә, ил урынына яңылыш ҡаланың шартлы билгеһен төшөргән, һ.б. Меркатор картаһында Башҡорт ҡалаһы бигерәк аныҡ сағылыш тапҡан: ҡала Ағиҙел, Ҡариҙел йылғалары ҡушылған урында төшөрөлгән.

Башҡорт ҡалаһын инҡар итеү әлеге ваҡытта ошо кимәлдә бара. Әгәр ҙә барлыҡ Башҡортостан ғалимдары бер төптән тороп, Башҡорт ҡалаһын таныһа, был мәсьәлә беҙҙең алда торған проблемаға ла әүерелмәҫ ине. Әгәр ҙә ошондай бер ҡала Рязань йә Мордовия ерендә табылһа, ғалимдар алдында бер ниндәй ҙә проблема тормаҫ ине. Боронғо Башҡорт ҡалаһының

ыш башҡорттарын ырыуҙары тарихына таянып ҡына кире үҙ асылына ҡайтарып була. Әйтәйек, ғәйнә, гәрәй, йылан ырыуҙары башҡорттарына ырыуҙары хаҡында һөйләй башлауға улар шундуҡ үҙҙәрен башҡорт тип таный. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Мәсьәлә бында ябай ғына: улар йоғонтоһона бирелгән татар милләтендә ырыуҙар юҡ.

2002 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыуҙа Башҡортостанда башҡорттар дөйөм халыҡтың 30 процентын тәшкил итте. Минең иҫәпләүҙәр буйынса, милләтебеҙҙең республикалағы реаль нисбәте 40 процент тирәһе. Беҙҙә һаман да көнбайыш башҡорттарын үҙ асылына ҡайтарыу буйынса дәүләт сәйәсәте үткәрелмәй, матбуғат саралары ла тейешле кимәлдә эшләмәй. Рәхимов властан китте, тип, шәжәрә байрамдарын онотоу ҙа дөрөҫ түгел. Сөнки бындай саралар власть өсөн түгел, халыҡты үҙ асылына ҡайтарыу өсөн

# Көсһөҙҙән – тайшаналар...

## тағы бер ҡараш

нештәр хаҡында әлегә бер ниндәй ҙә яҙма сығанаҡтар табылмаған. Беҙгә был йәһәттән әлегә башҡа тарихи сығанаҡтарға һәм тарихи ваҡиғаларға таянып фараз итергә генә ҡала. Беренсенән, Урал тауҙары һәр төрлө һөжүмдәрҙән һаҡланыр өсөн уңайлы тәбиғи ҡәлғәне тәшкил иткән. Мәҫәлән, Алтын Урҙа тарафынан ҡыйратылған Дәште Ҡыпсаҡ империяһы ярсыҡтары ҡотолор юл эҙләп төрлө яҡҡа һибелгән. Уларҙың бер өлөшө Венгрияға китә һәм ауыр яҙмышҡа дусар була. Был илдә венгр королдәре уларҙы католик диненә күсергә мәжбүр итә. Грузияға киткән ҡыпсаҡтар ҙа шундай уҡ яҙмышҡа тарый. Күптәре Ислам дине хөкөм һөргән мосолман илдәренә, бер өлөшө Башҡорт иленә килеп һыйына. Башҡорт иле ҡыпсаҡтарҙы ғына түгел, бында һыйыныр урын эҙләп килгән һәр кемде ҡабул итә. Образлы итеп әйткәндә, "Ирекле кешеләр республикаһы" ролендәге Башҡорт иле килеүселәргә йәшәргә урын бирә, уның именлеген тәьмин итә. Килеүселәр үҙ нәүбәтендә урындағы ҡәүемдең телен, динен, йолаларын, бер һүҙ менән әйткәндә, милләтен ҡабул итә. Ирекле ырыуҙар федерацияһын тәшкил иткән халыҡ составындағы эре ҡәбилә менән бәләкәй генә ырыу ҙа дөйөм Башҡорт ҡоролтайында бер тигеҙ тауышҡа эйә була. Халыҡтың яҙылмаған ҡануны буйынса эре ҡәбилә бер ваҡытта ла бәләкәй ырыуҙы кәмһетмәгән, йәберләмәгән. Халыҡ йәшәйешенең тап ошо тигеҙлек һәм тиң хоҡуҡлылыҡ принцибы ситтәрҙе Уралтауға - Башҡорт иленә ымһындырып әйҙәп торған да инде. Ни генә тимә, ситтә кәмһетелеп,

### Башҡорт ҡалаһы

Урта быуаттарҙан алып тарихсылар үҙҙәренең карталарында, тарих йылъяҙмаларында хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфө урынында Башҡорт ҡалаһы торған тип иҫбатлап торғанда, хәҙерге донъяның ғилми йәмәғәтселегеге шул тарихсыларҙың һүҙен йөпләп торғанда, Өфө-II ҡаласығында табылған ҡомартҡыларҙың ошо барлыҡ факттарҙы дәлилләп торғанында, республика йәмәғәтселегеге һәм етәкселеге Өфө ҡалаһы урынындағы



хаҡында ҡат-ҡат белдерҙе. Был ғалимдар үҙ эштәрен профессиональ кимәлдә башҡара. Улар үткәргән тикшереүҙәр һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй Фәндәр академияһы, Мәскәү археология институты тикшереү үткәреп, үҙ ҡарарын сығарҙы; ысынлап та, Өфө-II урынында урта быуаттарҙа ҙур административ үҙәкте тәшкил иткән ҡала булған. Яҙма сығанаҡтар ҙа уларҙың дөрөҫлөгөн раҫлай. Мәҫәлән, Иҙриси яҙмалары. Хәҙерге күҙлектән сығып, Башҡорт

> ***Ваҡытында Булат Рафиҡов ырыуҙар хәрәкәтен башлағас, уны трайболизмда ғәйепләй башланылар. Ырыу тарихы мәсьәләһен күтәрмәүҙе хуп күрәләр күп кенә ғалимдар. Нисек күтәрмәйһең - халҡыбыҙ тарихын өйрәнгәндә ырыуҙарҙы бер нисек тә урап үтә алмайбыҙ. Республикабыҙҙың көнбайыш башҡорттары татар милләте йоғонтоһона бирелә. Ул зонала эшләгәс, шуны беләм: көнбайыш башҡорттарын ырыуҙары тарихына таянып ҡына кире үҙ асылына ҡайтарып була. Әйтәйек, ғәйнә, гәрәй, йылан ырыуҙары башҡорттарына ырыуҙары хаҡында һөйләй башлауға улар шундуҡ үҙҙәрен башҡорт тип таный. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Мәсьәлә бында ябай ғына: улар йоғонтоһона бирелгән татар милләтендә ырыуҙар юҡ.***

боронғо Башҡорт ҡалаһы тороуы фактын танырға, таныуын рәсми рәүештә белдерергә ашыҡмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, боҙ урынынан ҡуҙғалды. Ҡаласыҡ урынында ҡаҙыныу эштәре әле 5 йыл ғына барыуын һәм ғалимдарҙың, йәмәғәтселектең, етәкселектең фекерләү инерцияһын иҫәпкә алғанда, борсолорға урын юҡ, минеңсә. Ҡайһы ваҡыт бер генә фекерҙе яҡлау өсөн дә тиҫтәләгән йылдар талап ителә. Әлеге ваҡытта Өфө-II ҡаласығы буйынса тупланған факттар баҫымы барыбер ҙә йәмәғәтселектең фекеренә йоғонто яһап, барыһын да үҙ урынына ҡуясаҡ. Мин быға ышанам. Хет тағы ла 10 йыл үтһен, барыбер Башҡорт ҡалаһы үҙ исеме менән аталып

ҡалаһын нисек кенә инҡар итмәһендәр, уның әһәмиәтен кәметмәһендәр, Иҙрисиҙең башҡорт ҡалалары тураһындағы яҙмаларын үҙгәртеп яҙып, мөхәррирләп йә юҡ итеп булмай. Ҡайһы берәүҙәр шулай тип тә белдерә: имеш, Иҙриси башҡорт ҡалалары тип яңылыш яҙған, улар ни бары башҡорттарға барған юлдарҙа ятҡан ҡалалар булған. Археология, яҙма сығанаҡтар һәм картография - барыһы ла хәҙерге Өфө урынында боронғо Башҡорт ҡалаһы торғанлығын иҫбатлай. Каталон атласында аҡҡа ҡара менән Ағиҙел буйында торған Башҡорт ҡалаһы төшөрөлгән. Карта 1375 йылда төҙөлгән. Тегеләр иһә был фактты шулай аңлата: имеш, унда Башҡорт ҡалаһы

рәсми рәүештә һаман да танылмауының төп сәбәбе, билдәле, уның башҡорт милләтенә бәйле булыуында.

### Ҡуян һурпаһының һурпаһы

Ваҡытында Булат Рафиҡов ырыуҙар хәрәкәтен башлағас, уны трайболизмда ғәйепләй башланылар. Ырыу тарихы мәсьәләһен күтәрмәүҙе хуп күрәләр күп кенә ғалимдар. Нисек күтәрмәйһең - халҡыбыҙ тарихын өйрәнгәндә ырыуҙарҙы бер нисек тә урап үтә алмайбыҙ. Республикабыҙҙың көнбайыш башҡорттары татар милләте йоғонтоһона бирелә. Ул зонала эшләгәс, шуны беләм: көнбай-

кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, шәжәрә байрамдары күптәрҙең күҙен асты.

Беҙ тарихыбыҙҙың ҙур өлөшөн белмәйбеҙ әле. Тарих нимә ул? Ул иң беренсе нәүбәттә тарихи сығанаҡтар, ҡағыҙға төшкән факттар, археологик ҡомартҡылар һ.б. Мин, мәҫәлән, ғәрәп сығанаҡтарын ныҡ өйрәндем һәм ул даирәлә башҡорт тарихы тураһында күпмелер мәғлүмәт туплағанмын. Шул уҡ ваҡытта Ҡытай, Ватикан архивтарындағы беҙҙең тарихҡа бәйле документтар менән хәбәрҙар түгелмен. Әхмәтзәки Вәлиди шәреҡ тарихын өйрәнеү өсөн 6 телде белеүҙе талап иткән. Улар: ҡытай, төрөк, ғәрәп, инглиз, француз һәм рус телдәре. Әгәр ҙә тарихсы тәүсығанаҡтарҙы төп нөхсәһендә өйрәнмәй, билдәле телдәргә тәржемә итеп баҫылғандары нигеҙендә генә ғилми эш яҙһа, был хәл, башҡортса әйткәндә, "ҡуян һурпаһының һурпаһы" кеүек килеп сыға инде.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Салауат Хәмиҙуллин бөрйәндәр тарихы хаҡындағи ғилми хеҙмәтен кандидатлыҡ диссертацияһы итеп яҙған. Алла бойорһа, алдағы йылда ул был хеҙмәтен рәсми рәүештә яҡлауға сығарасаҡ. "Ә ҡасан "Башҡорт этногенезы" тигән ғилми хеҙмәтеңде яҙырға тотонаһың?" тип уйынлы-ысынлы һорау бирҙем уға. "Башҡорт этногенезы" мәсьәләһен өйрәнер өсөн тарихыбыҙға бәйле яңы факттар, яңы дәлилдәр, яңы фекерҙәр, өр-яңы концептуаль ҡараш кәрәк", тип кенә яуапланы Салауат. Минеңсә, Салауат күп һанлы телетапшырыуҙарында, фильмдарында күптән инде был проблема өҫтөндә эшләй. Уңыштар теләйек уға!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Мулла

60-сы йылдар уртаһы. Коммунистар партияһының хужалыҡ етәкселәрен урындан-урынға күсереп тәғәйенләү осоронон ин ҡыҙған дәүере. Беҙҙең колхозға ла рәйес итеп күрше район ауылдарының береһенән, әллә ниндәй юғары белемгә эйә булмаһа ла, утлы һуғыш йылдарын үтеп, ауыл тормошон аңлаған, дөйөм хужалыҡ эштәре менән ярайһы уҡ таныш кешене килтереп ҡуйҙылар. Дүрт бригаданан торған хужалыҡ буйлап йыйылыштар үткәреп, колхозсылар менән танышып йөрөй икән яңы рәйес. Өсөнсө бригадала халыҡ күп кенә йыйылһа ла, бригадир ниңәлер йыйылышты асырға ашыҡмай. Яңы рәйес, түҙемлеге бөтөп: "Башлайыҡ, килеп бөттөләр, ахыры",- тип ашыҡтырған. "Туҡтағыҙ, Мулла килмәгән бит әле, Муллаһыҙ йыйылышты башлап булмай", - тип бригадир тағы көттөрә ти. Яңы рәйес: "Совет заманында мулла ҡатнашлығында йыйылыш үткәрәләрме ни, уның үткәреп булмаймы ул?"- тип, аптырап, ҡәнәғәтһеҙлеген белдергән. Халыҡ гөр килеп көлөргә керешкән. Бәхетенә, уның дин әһеле тип уйлаған кешеһе бригаданың хисапсыһы, колхозсылар уның исемен ҡыҫҡартып Мулла тип кенә йөрөткән Муллажәмғул тигән колхозсы икән.

### Өс көнлөк

Икенсе бригаданың сускасылыҡ фермаһы бригаданың үҙәге урынлашҡан ауылдан 4-5 саҡрым алыҫлыҡта ята ине. Ауылда өс-дүрт урыҫ ғаиләһе лә йәшәне, суҫҡа фермаһына Сергеев фамилиялы урыҫ етәкселек итте. Шулай бер тапҡыр суҫҡа ҡараусы ағайҙы өс көнгә ҡунаҡҡамы, туйғамы саҡырғандар. Был уйлап йөрөгән-йөрөгән дә, мөдиргә әйтмәй генә ҡунаҡҡа барып килергә булған. Әйткән хәлдә лә барыбер ебәрмәйәсәк - урынына ҡалдырыр кеше лә юҡ. Китер алдынан, кисен, сускаларға аҙыҡты күберәк ҡалдырып китергә булған: "Бына һиңә өс көнлөк, бына һиңә өс көнлөк", - тип һөйләнә-һөйләнә таратып йөрөгән саҡта ферма мөдире килеп кергән. Сускалар менән "һөйләшә-һөйләшә" эшләп йөрөгән ағайға ҡарап торған-торған да, бер нимә лә аңламай, сығып киткән. Икенсе көн ағайыбыҙҙың юҡлығы асыҡланғас, мырҡылдыҡтарҙы асҡа үлтереп булмай, эш ҡушырлыҡ башҡа кеше юҡ, аптырағас, мөдир үҙе эшкә тотонған.

Өс көн ял итеп, ләззәтле ҡунаҡ тәьҫораттарынан арынып та бөтмәгән ағайыбыҙҙы эштә урыҫтың ҡыҫҡа булһа ла күп мәғәнәгә эйә һүҙҙәре менән мөдир ҡаршылай: "Я теперь понял что такое "өс көнлөк"?"- тип туҙҙырып әрләп китә. Шул осраҡтан һуң мөдиребеҙ башҡортса аңлау өсөн бик ныҡ тырышты. Тырышлығы бушҡа китмәне - бер аҙҙан апаруҡ һупалай ине инде...

### Торна менән бесәй

Дүртенсе бригада урынлашҡан ауылда һәр кешенең ҡушаматы бар. Бер-береһенә мөрәжәғәт иткәндә лә ҡушаматы менән генә өндәшәләр. Йәмле яҙ көндәренең береһендә "торна" ҡушаматлы Данис тигән механизатор урамдан үтеп бара икән. Ҡараһа, иптәше, "бесәй" ҡушаматлы Әмир өйөнөң солан башынан ҡар ташлай, ти. Был үтеп барышлай тегене: "Әллә яҙғы бесәй туйына әҙерләнәһеңме?"- тип үсектергән. Әмир ҙә яуапһыҙ ҡалмаған: көрәген ташлаған да, ҡулдарын ике яҡҡа йәйеп, ҡанат һымаҡ итеп елпеп, торна тауыштарын сығарып, ихласлап тороп тегегә яуап бирә икән. Шул ваҡытта ихатала хужалыҡ мәшәҡәттәре менән булышып йөрөгән әсәһе, быны күреп, аптырап: "Килен, килен, тиҙерәк сыҡ, әллә беҙҙең Әнүәр иҫәрләнеп киткән инде, солан башында торна булып ҡысҡыра",- тип киленен саҡыра икән. Әнүәрҙәренең урамдан үтеп барған "торна" Данисты ошолай итеп ихлас үсекләгәнен белгәс кенә тынысланған әсәһе менән ҡатыны.

### Ҡорғаҡһыған балталар

Ауылда бәләкәй генә ваҡиғаларҙы ла етди ҡабул итеп, тиҙ тоҡанып, ҡыҙып китеүсәнерәк Ғәзим ағай йәшәне. Шулай бер тапҡыр ул балта оҫталарын өмәгә саҡырып, ҙур булмаған бура буратырға булған. Көн буйы эшләп, эштән һуң ашап, һыйланып, балталарын ҡалдырып, оҫталар өйҙәренә таралышҡан. Иртән килгәндә мотлаҡ баш төҙәтеү өсөн эшләнә ине балта ҡалдырыу. Оҫталар ҡайтып киткәс, ағайыбыҙ барып, йылға буйындағы бураһын ҡарап килергә булған. Ҡарап йөрөй торғас, етешһеҙлектәрен тапҡан: бүрәнәләр тигеҙ һалынмаған, араларындағы ярыҡтары күренеп тора, баштары ла ныҡ итеп уйып алынған. Ныҡ асыуы килгән хужа, ҡыҙып китеп, йүгереп ҡайтып, оҫталар ҡалдырған балталарҙы йыйып алып килгән дә, йылғаға ырғытҡан. Иртән оҫталар берәмберәм йыйылғандар, ҡараһалар, балталар урынында юҡ. Хужанан һораһалар, ул: "Балталарығыҙ ҡорғаҡһығайны, шуға йылғаға ташланым!"- ти икән. Эштең айышына төшөнгән оҫталар баш төҙәтеү әләкмәйәсәген аңлап, балталарын һыуҙан алып, өйҙәренә таралышҡан.

### Төтәй ине

Бер ваҡыт Ғәзим ағай ҡатыны менән һүҙгә килеп, ныҡ ҡыҙып киткән, хәләлен әҙерәк аҡылға ултыртып алырға булған. Ҡатынын баҫтыра башлаған, ә уныһы өй эсендә оло мейес тирәләй урап ҡасып тик йөрөй икән. Баҫтырыша торғас, мейестең мөйөшөн кирбестәре менән емереп төшөргәндәр. Шул саҡ быларға бер-ике өй аша ғына йәшәгән ауылдаштары Мөхәмәтша тигән кеше килеп кергән. Былар, әлбиттә, баҫтырышыуҙан туҡтаған, талашҡандарын белдермәҫкә тырышалар икән. Хәл-әхүәл һорашып, һөйләшеп ултыра торғас, Мөхәмәтдин мейестең емерелгәнен күреп ҡалған: "Нәмә, әллә мейесеңде ҡутара башлағанһың инде?"- тип ҡыҙыҡһынған. Ғәзим аптырап ҡалмаған: "Эйе, ҡутара башланым, төтәй ине",- ти икән.

### Друг, выручай!

Дүртенсе бригадала һыйыр фермаһы бар ине. Һөттө бортлы йөк машинаһында фләгәләр менән ташыйҙар. Йүнле юл юҡ, айырыуса, яҙлы-көҙлө йонсоу көндәрҙә юл шул тиклем боҙола, машиналар менән үтеп булмай башлай. Ул ваҡыттарҙа һөттө тракторҙар ярҙамында колхоз үҙәгенә алып киләләр, артабан машина алып китә.

Шулай бер көндө водитель Ғәзиз колхоздың Илдар исемле оҫтаһы менән көн буйы машинаһын йүнәтеп, уның төҙәклөгән ныҡ ҡына итеп "йыуып" ҡуйғандан һуң, икәүләшеп һөт тапшырырға китәләр. Юлдың яртыһы самаһын үткәс, машина юлдағы тәрән соҡорҙарҙың береһенә кереп "сума". Оҙаҡ ҡына этләнһәләр ҙә, машинаны сығара алмайҙар былар. Шунан Ғәзиз трактор артынан бригадаға китә, ә Илдар машина янында ҡала. Бер килке ваҡыт үткәс, Илдар ферма яғынан УАЗ машинаһы килгәнен күреп ҡала. Ҡаршыһына сығып туҡтата, урыҫтар икәнен белгәс, урыҫсалап: "Друг, выручай, помоги машину вытащить",- тип ярҙам һорай. "Я тебя сейчас выручу!" - тип ишекте шап иттереп яба ла ундағы кеше, машина ҡуҙғалып китә.

Ғәзиз бригаданан трактор табып килеүгә машина янында ГАИ инспекторы менән милиционер көтөп тора икән. Протокол төҙөп, Ғәзиздең шофер таныҡлығын алып, Илдарҙы алып китеп, КПЗ-ға ун биш тәүлеккә ултыртып ҡуйғандар. Бәхетиһән, УАЗ-иктағы кеше фермалағы эштәр менән танышып ҡайтып барыусы райкомдың беренсе секретары булған икән.

### "Кәзә"не буйһондороу

Ауылда бер генә техникаға ла битараф булмаған Кәрим тигән кеше йәшәне. "Дружба" мотобысҡыһын ауылда беренселәрҙән булып һатып алып, үҙләштереп, халыҡҡа утын бысышты, унан башҡа ауылда тәҙрәләргә быяла киҫеп ҡуйыусы булманы. Колхоздың ҡамыт-иңғырсаҡ кеүек кәрәк-яраҡтарын йүнәтеү ҙә уның өҫтөндә ине.

"Кәзә" тип аталған бәләкәй мотоциклдар күренә башлағас, Кәрим ағайыбыҙ ауылда беренселәрҙән булып мотоцикл һатып алды. Олоғая башлағанғамы икән, әллә икенсе сәбәптәре булдымы - яңы техниканы бик ауыр үҙләштерҙе ул. Йөрөргә өйрәнергә ауыл осондағы ҙур яланға сыға торғайны. Нисектер ҡыҙҙырып ултырып сығып китә, ә бына боролорға, туҡтарға белмәй. "Мин бер яҡҡа борам, ул туры ағасҡа бара, инде барып бәрелә тигәндә, әл дә йығылып төшөп ҡалырға баш эшләне", - тип, ҡайтҡас ҡарсығына үҙенең тәьҫораттарын һөйләй икән. Икенсе бер ваҡыт йөрөп ҡайтып, урамына керәйем тиһә, ҡапҡа асыҡ түгел. Туҡтамайса ғына ҡарсығына: "Ҡапҡаны асып ҡуй!" - тип ҡысҡырып, ауылдың икенсе осона сығып, яланда боролоп, тағы өйөнә яҡынлаша. Ҡараһа, ҡапҡаның бер яҡ яртыһы ғына асыҡ. Ул тағы инергә ҡурҡып: "Ҡапҡаны ныҡыраҡ итеп ас!" - тип ҡысҡыра ла, ауылдың икенсе яҡ осона үтеп китә. Яландан боролоп килгәс, урамына нисектер кереп, аҙбар бүрәнәһенә барып төртөлөп туҡтай икән. Ярай, бәхетенә күрә, бер ниндәй йәрәхәт алмай, бер нәмәне лә түкөтмәй, тапатмай, аҙаҡтан барыбер өйрәндә йөрөргә ағайыбыҙ.

**Яңыбай МОНАСОВ.**

ЗАУЫҠ

# МИЛЛӘТ ЯРҺЫП ИРЕК ДАУЛАҒАНДА,

## һин һүнмәҫкә тейеш, шиғриәт!

### ШИҒРИӘТ ТУРАҺЫНДА УЙЛАНЫУ

Бөгөн һинең лираң тынған, тиҙәр,
Өҙөлгән бит, тиҙәр, ҡылдары.
Ҡанат остарында осмай, тиҙәр
Башҡортомдоң зарлы йырҙары.

Вулкан атып тауҙар емерелгәндә,
Шул вулкандай хистәр урғылғанда,
Күктә әле ҡояш һүнмәгәндә,
Йөрәктәрҙә ялҡын дөрләгәндә,

Һағыш менән һағыш табышҡанда,
Тән менән йән бергә ҡауышҡанда,
Йөрәк менән аҡыл тартышҡанда,
Изге менән яуыз алышҡанда,

Яҙмыш беҙҙе бик ныҡ алдағанда,
Баш осонда ҡылыс ҡайрағанда,
Милләт ярһып ирек даулағанда,
Һандуғастар моңло һайрағанда,
Һин һүнмәҫкә тейеш, шиғриәт!

### УЙЛАНЫУ

Нинә ерҙә мәңгелек яҙ түгел,
Көҙҙәр етеп, һулый үләндәр.
Нинә бер саҡ терелеп ҡайтмай икән
Беҙҙән ғүмерлеккә киткәндәр.
Әллә улар беҙҙән киткән саҡта,
Биҙеп китәләрме мәңгегә?
Нужа күреп йөрөмәҫ өсөн ерҙә,
Ҡайта мәллә беҙгә йән генә?
Һәр саҡ минең күкрәгемдә өтә
Эсе ҡаяу кеүек бер нәмә:
Нинә бер изгелеккә мең яуызлыҡ,
Ә хыянат тотош гөлләмә?
Нинә күкрәк тултырып һулау өсөн,
Тотош ғаләм беҙгә тар икән?
Тағы ҡайҙа барып, ниҙәр күреп,
Ниҙәр кисерәһе бар икән?

### КИТМӘ, ЯҘЫМ...

Шоморт сәскә ата. Әйтерһең дә
Туй күлдәген кейгән ҡыҙ кеүек.
Аҡһыл сәскәләрҙән Ергә тама
Татлы бал шикелле аҡ күбек.
Берсә янып, берсә һүнеп китәм
Ҡыуанысלы һағыш утынан.
Еҫтәренән иҫереп сәскәләрҙең
Ағастарға килеп тотонам.
Суклы сәскәләрҙе ҡулға тотоп,
Һурып үптем танһыҡ ҡалғансы.
Яҙғы ел осортто бер сәскәмде:
Ҡарап ҡалдым күҙем талғансы.
Сәскә артынан осоп киттең, яҙым,
Йырлап үттең йырҙың аҫылын.
Тик, яҙҙарым, ниңә китәһегеҙ -
Аңламаным шуның асылын.

### ЭЙ, ОСАҺЫҢ!

Эй, осаһың, айым, эй, осаһың,
Тауҙарымды ятып ҡосаһың.
Ныҡ һоҡланып һиңә ҡарап булмай -
Болоттарға инеп боҫаһың.
Эй, осаһың, айым, эй, осаһың,
Нинә беҙҙән ҡасып боҫаһың?
Һөттән дә аҡ яҡты нурҙарыңды
Кемдәр өсөн ҡайҙан һосаһың?
Эй, осаһың, айым, эй, осаһың,
Кемдән ҡурҡып шулай ҡасаһың?
Нинә биттәреңде сибәр ҡыҙҙай,
Берсә ябып, берсә асаһың?
Эй, шашаһың, айым, эй, шашаһың,
Аҡ күбектәй күктә ташаһың.
Бер һирпелеп һиңә ҡарау етә -
Янған йөрәктәрҙе баҫаһың.

**Марс НУРИЕВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕФОНДАН...
## ир-ат күберәк һөйләшә

■ Бөгөн тормош иҫ киткес шәп тиҙлектә аға. Был кешенең сәләмәтлегенә зыян килтермәйенсә ҡалмай, Британия психологтары һәм физиологтары белдереүенсә, һаулыҡ торошо, үҙ-ара мөнәсәбәттәр насарая, нервылар ҡаҡшай. Лондон социологтары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кешеләр хәҙер ғаилә һәм балалар менән аралашыуға ла, хатта ашауға, йоҡлауға ла әҙерәк ваҡыт бүлә. Шулай уҡ эш хаҡы ҡулға эләккәс тә күптәр беренсе аҙнаһында тотоноп бөтә һәм ҡалған аҙналарҙы аҡсаһыҙ йәшәй. Психолог Хани Ланкастер-Джеймс белдереүенсә,тормоштоң һиҙелерлек "тиҙәйеүе" арҡаһында күптәрҙә нервылар көсөргәнеше барлыҡҡа килә.

■ Көндәлек мәшәҡәттәрҙән арып китһәгеҙ, массаж эшләтегеҙ, тип кәңәш итә белгестәр. Дөрөҫ эшләнгән массаж стресс һәм проблемаларҙы оноторға ярҙам итеп кенә ҡалмай, төрлө ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа булышлыҡ итә. Мәҫәлән, массаждан һуң баш, арҡа, мускулдар һәм быуындар ауыртыуы юҡҡа сыға. Табиптар әйтеүенсә, был хатта дарыуҙар йәки хирургик операцияға ҡарағанда яҡшыраҡ һөҙөмтә бирә. Америка физиологтары массаждың анорексиянан дауаланғанда ла яҡшы ярҙам итеүен асыҡлаған.

■ Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда телефондан оҙағыраҡ һөйләшә, тиген ҡараш йәмғиәтебеҙҙә күптән нығынған инде. Әммә социологик һорау алыуҙар бының тап киреһенсә булыуын күрһәтә. Биш йыл элек үткәрелгән тикшеренеүҙәр буйынса, телефондан һөйләшеүгә ир-ат көнөнә 22 минутын сарыф итһә, бөгөн ул уртаса 32 минут тирәһе һөйләшә. Ә бына гүзәл зат телефондан әҙерәк аралаша башлаған: әгәр ҙә ул 2002 йылда көнөнә 35 минутын телефон менән үткәрһә, хәҙер - 26 минут. Быны белгестәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың электрон почтаға һәм төрлө текслы агентлыҡтарҙа аралашыуға күсеүе менән аңлата. Әйткәндәй, 22 процент ир-ат телефондан спорт саралары, 22 проценты ҡатын-ҡыҙҙар, 20 проценты аҡса тураһында һөйләшә. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 32 проценты башлыса ир-ат йәки кейем-һалым тураһында әңгәмәләшергә ярата икән. Телефондан иң күп һөйләшеүсе ил тип Шотландия табылған, унда оло йәштәге кешеләрҙең 62 проценты көнөнөң 30 минутын телефондан аралашыуға бағышлай.

■ Алтындың кеше организмына ыңғай тәьҫир итеүен беләбеҙ. Күптән түгел ғалимдар был металдың файҙалы үҙенсәлектәренә фәнни яҡтан аңлатма биргән. Швеция һәм Америка ғалимдары белдереүенсә, бәләкәй дозаларҙа алтын кешенең иммун системаһын яйға һалыу һәләтенә эйә. Алтын тоҙҙары иммун күҙәнәге ядроһынан ялҡынһыныу булдырыусы протеин бүленеүен кәметә. Ғалимдарҙың был асышы ҡайһы бер ауырыуҙарға, мәҫәлән, ревматизмға ҡаршы яңы һөҙөмтәле дарыуҙар уйлап табырға ярҙам итәсәк.

■ Психологтар әйтеүенсә, ихлас итеп ҡысҡырып көлөүсе эргә-тирәһендәге кешеләрҙең дә кәйефен күтәрә. Америка белегестәре үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың көлөүе барыһына ла ыңғай тәьҫир яһай. АҠШ-тың Джорджия штаты экспертары әйтеүенсә, бының өсөн гүзәл зат ауыҙын киң асып, "ха-ха" тигән характерлы тауыш сығарырға тейеш. Тап ошо үҙенсәлекле көлөү механизмы яҡшы кәйефте башҡаларға "йоҡторорға" һәләтле, ти белгестәр.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЙӘЙ МИҘГЕЛЕНЕҢ...
## иң татлы ризығы



**Был татлы емеш ҡасандыр Африканың тропик урмандарында ҡырағай шарттарҙа үҫкән. Билдәле тикшеренеүселәр уны Намиб сүллеге һәм Калахари ярымсүллегендә барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләй. Беренсе ҡарбуз уңышы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе бынан 5 мең йыл элек төшөрөлгән Мысыр иероглифтарында күрергә лә була, тик уны тәүҙә орлоҡтарынан бик файҙалы май алыу өсөн үҫтерәләр . Әйткәндәй, Мысыр мифтары буйынса, ҡарбузды яуызлыҡ башланғысын сағылдырыусы сүллек һәм йәшен аллаһы Сет "сәскән". Ҡарбузды тәү башлап Ҡытайҙа үҫтерә башлайҙар, ә Европаға ул ун өсөнсө быуатта ғына килә.**

**Шәкәргә, В1, В2 витаминдарына, никотин, аскорбин (С витамины), фолий кислоталарына, каротинга, пектин матдәләренә бай булған ҡарбуз август айының иң төп аҙыҡтарының береһе иҫәпләнәләр, моғайын. Ысынлап та, ҡарбуз, күптәр иҫәпләүенсә, емеш-еләк түгел, ә ҡабаҡтар ғаиләһенә ҡарай.**

### Дүрткел ҡарбуз

Бер нисә мең йыллыҡ эсендә донъяның төрлө континенттарында ҡарбуздың меңәрләгән сорты барлыҡҡа килтерелгән. Хәҙер ҡарбуз, әйтәйек, экваторҙың үҙендә йәки Мәскәү тирәһендә лә үҫтерелә. Тышы йәшел генә түгел, ә һары, йәки ҡара ҡарбуздар була, уларҙың эсе лә, беҙ күреп өйрәнгәнсә, алһыу ҡыҙыл төҫтә түгел, мәҫәлән, аҡ, һары йәки сағыу һары булыуы ихтимал. Кеше фантазияһының сиге юҡ, бынан бер нисә йыл элек Японияла квадрат ҡарбуздар барлыҡҡа килде. Дүрткел ҡарбуз үҫтереүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ, бының өсөн ҡарбузды быяла квадрат йәшниктәр эсендә үҫтерәләр. Белгестәр бындай ҡарбуздарҙы һаҡлауы ла, төрлө урындарға ташыуы ла уңайлы, тип иҫәпләй.

### Нисек һайларға?

Был һорау ҡарбуз яратыусы һәр кемде борсойҙор, моғайын. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, сифатлы ҡарбуз һайлау өсөн теоретик белем генә аҙ. Бында даими практика кәрәк. Шулай ҙа һеҙгә ярҙам итеп ҡарайыҡ. Беренсенән, "дөрөҫ" ҡарбуздың күп билдәләре төрлө сорт ҡарбуздар өсөн тап килмәй. Беҙҙә киң таралаған "Әстерхан" һәм "Мелитопольский" сорттары ни тиклем нығыраҡ бешкән булһа, шул тиклем ҡарбуздың ҡойрого тирәһендәге ҡара һәм аҡ һыҙаттар араһындағы айырма көслөрәк күренә. Был сорттар августа өлгөрөп етә. "Волга" сорты ҡарбузы шар кеүек, асыҡ йәшел, һыҙаттары юҡ. Тышы ағарһа, был ҡарбуз бешкән тигән һүҙ. "Хаит-ҡара" үзбәк сорты баҙарҙарҙа көҙ күренә башлай, уның әҙер булыу күрһәткесе - тышының ҡара йәшел төҫкә инеүе.

### Ҡарбуз ҙурыраҡ булһын

Шулай ҙа иң тәүҙә ҡарбуздың ҙурлығына иғтибар итергә кәрәк. Һатыусынан бәләкәйерәк бешкән ҡарбуз һорау - ул нимә теләгәнегеҙ үҙең дә аңламау тигән һүҙ. Иң яҡшыһы - уртасанан ҙурыраҡ ҡарбуз һайлағыҙ. Ныҡ ҙур ҡарбуздар ашламаны артығыраҡ ҡулланғандан үҫеүе ихтимал. Яҡшы ҡарбуз 5 килограмдан аҙыраҡ булмай. Тағы ла бер мөһим үҙенсәлек: өлгөргән ҡарбуз артыҡ ауыр булмай, сөнки бешкән саҡта уның ушсанлығы тығыҙлығы кәмей. Һәм тағы ла. Бик булмаһа, ҡарбуздарҙы һыуҙа батырып ҡарап өлгөргәнлеген тикшереп була. Бынын өсөн ваннаға һыу тултыраһың дә, ҡарбузды һыуға төшөрәһең. Һыу өҫтөндә аҙыраҡ торғаны бешеп еткән була.

### "Ҡыҙҙар" һәм "малайҙар"

Халыҡ араһында ҡарбузды енестәргә бүлеп ҡарау ҙа киң таралған. Уларҙы айырыуы ауыр түгел, "Малай" ҡарбуздың ҡойроғо урынлашҡан өлөшө ҡабарынҡы, ә ҡойроғо тирәһендәге түңәрәге бәләкәй генә. "Ҡыҙҙар"ҙың, киреһенсә, ялпаҡ һәм дүңгәләге тимер аҡса ҙурлығында. "Ҡыҙҙар" төмләрәк иҫәпләнә, уларҙа шәкәр күберәк. Әммә белгестәр ҡарбуздың енесенә иң һуңғы сиратта иғтибар итергә ҡуша.

### Сағыу төҫ

Ҡарбуздың тышындағы һыҙыҡтар ни тиклем сағыуыраҡ һәм улар араһындаға айырма ни тиклем асығыраҡ күренә, эсе шул тиклем өлгөргәнерәк була. Асығыраҡ өлөштәр аҡһылыраҡ булһа, ҡарбуз күптән өлгөргән. Ә ҡара һыҙыҡтарҙың сағыуыраҡ булыуы ҡарбуз үҫкән шарттарҙың яҡшы булыуы тураһында һөйләй.

### Тышы ҡаты булһын

Өлгөрөп еткән ҡарбуздың ҡабығы ҡаты булырға тейеш, уны тырнаҡ менән үтә төртөп булмай. Шуға ла һуҡ бармағығыҙҙың тырнағы менән ҡарбуздың тышын үтә төртөп ҡарағыҙ. Әгәр ҙә тырнаҡ ҡабыкты еңел генә үтеп инә икән, ҡарбуз бешмәгән.

### Һуҡҡылап ҡарағыҙ

Алда әйтелгән кәңәштәрҙең барыһын да ҡулланғандан һуң да ҡарбуздың сифатында шикләнәһегеҙ икән, уны һуҡҡылап һәм ҡыҫҡылап ҡарарға була. Күптәр ҡарбузды ике яҡтан ҡул менән ҡыҫып ҡарай, был саҡта ҡарбуздың эсенән тауыш ишетелергә тейеш. Был бик яҡшы тест, әммә ул оҙайлы юл үткән ҡарбуздар өсөн ҡулайлы түгел. Юлда бешкән ҡарбуздарҙың эсе һелкенеп, бушай төшә. Шуға ла улар аҙаҡтан тауыш сығармауы ихтимал. Бына шуның өсөн дә ҡарбузды һуҡҡылап ҡарарға кәрәк. Ҡарбузды һул ҡулығыҙҙың усына һалығыҙ. Уң ҡул менән ҡарбузға аҫтан өҫкә, өҫтән аҫҡа һуҡҡылап ҡарағыҙ. Әгәр ҙә тауыш сағыу ишетелә икән, ҡарбуздың сифатында шикләнергә кәрәкмәй.

### Ҡарбузлы химия

Июлдә һәм хатта август башында ҡарбуз һатып алырға ярамай, тип иҫәпләүселәр дөрөҫ эшләй. Сөнки Рәсәйҙә ҡарбуздың күп төрҙәре август уртаһына йәки аҙағына ғына бешеп етә. Шуға ла улар йә өлгөрөп етмәҫ элек, йәки азот һәм үҫеште тиҙләтеүсе ашламалар - нитраттар нигеҙендә үҫтерелеп һатыуға сығарыла. Күп һуҡ һибелгән ҡарбуз да тиҙ өлгөрә. Улар хәүефһеҙ, әммә тәме юҡ. Ҡайһы бер һатыусылар ҡарбуздың эсе ҡыҙыл булһын өсөн уға марганцовкалы укол яһай. Был ысул да ҡулланыусының һаулығына зыян килтермәй. Иң ҡурҡынысы булып "химик" ҡарбуздар иҫәпләнә. Химикатлы ҡарбуз оҙаҡ һаҡланмай һәм уның тышында ҡараҡ төҫтәге йомшарған түңәрәк урындар барлыҡҡа килә, эсе ҡыҙыл, ә һөйәктәре аҡ төҫтә була. Бындай ҡарбузды ырҡҡан саҡта уның ҡыҙыл түгел, ә шәмәхә төҫөндәрәк булыуын күрергә була.

Химия менән тултырылған ҡарбузды түбәндәге ысул менән дә асыҡларға була: һыу һалынған стаканға ҡарбузды төшөрөп болғатһаң, һыу ҡыҙыл йәки алһыу төҫкә инә. Шуға ла химия менән тултырылған ҡарбуз ашап, сәләмәтлегегеҙгә зыян килтермәйем, тиһәгеҙ, август аҙағы - сентябрь башына тиклем ҡарбуз ашамай торороҡ. Шулай уҡ юл буйҙарынан ҡарбуз һатып алмағыҙ, сөнки ул һауанан төрлө зарарлы матдәләрҙе үҙенә һеңдереү һәләтенә эйә.

### Химия ни тиклем зарарлы?

Нитратлы бер киҫәк ҡарбуздан һеҙгә бер нәмә лә булмаясаҡ. Әгәр ҙә бер үҙегеҙ тотош ҡарбузды ашап бөтһәгеҙ, эсегеҙ ауыртыуы йәки бауырға зыян килеүе ихтимал. Теоретик яҡтан, бындай ҡарбуз нервылар системаһы сирҙәренә килтереүе бар, әммә был һирәк осрай торған күренеш.

### Нисек йыуырға?

Табиптар фекеренсә, арбуздағы нитраттарға ҡарағанда, уның тышында "йәшәүсе" инфекциялар күпкә ҡурҡынысыраҡ. Оҙайлы юл үткәнсе унда бактериялар үрсей башлай, шуға ла ҡарбузды яҡшы итеп йыуырға кәрәк. Ҡайһы бер табиптар һабын ҡулланырға йәки ҡарбузды эҫе һыуға һалып алырға кәңәш итә. Шулай уҡ сауҙа нөктәләрендә ҡарбузды тәмләп йәки һатып ала торған ҡарбузығыҙҙы киҫтереп ҡарарға ярамай. Юғиһә, был осраҡта ҡарбуздың тышындағы бактериялар шунда уҡ уның эсенә үтеп инәсәк һәм үрсей башлаясаҡ.

### Ҡарбуз файҙалы ла

Ҡарбуз еңел үҙләштерелә торған тәбиғи шәкәрҙән, башлыса фруктоза һәм глюкозанан тора. Унда шулай уҡ В1, В2, С, РР витаминдары, фолий кислотаһы, каротин, пектин полисахаридтары, калий, магний, тимер, натрий, кальций, фосфор һәм башҡа микроэлементтар күп. Файҙалы матдәләрҙең бындай бай ассортименты йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына, ҡалҡан биҙенең эске секрецияһына, эсәк микрофлораһына яҡшы тәьҫир итә. Халыҡ медицинаһында ҡарбузды бөйөр һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары мәлендә шешенгәндә ҡулланалар. Уны урологик ауырыуҙар: цистит, нефрит, пиелонефрит ваҡытында ла ашарға кәңәш итәләр. Ҡарбузды диета ваҡытында ла ҡулланалар. Тимергә бай ҡарбуз анемиянан да ҡотҡара.

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

### Аурабыҙ тураһында

**Астраль тән** - ул беҙҙең кисерештәр һәм теләктәребеҙ йыйылмаһы. Әгәр кеше асыуланһа, көнләшһә, ҡурҡһа, үпкәләһә, һәм башҡа кире кисерештәр кисерһә, үҙенең астраль тәнен бысрата. Нимә ул асыу, ярһыу, үпкәләү? Улар ҡара, ауыр, агрессив энергия, уларҙан аура бысрана. Йәғни беҙ эмоцияға бирелһәк, төрлө энергия тыуҙырабыҙ: кире хис-тойғолар икән - ауыр һәм ҡара, ыңғай хис-тойғолар икән - еңел һәм сағыу. Үҙ сиратында астраль тән эфир тәнгә, тимәк, сәләмәтлеккә лә, йоғонто яһай.

**Менталь тән** - беҙҙең уйҙарыбыҙҙың йыйылмаһы. Тыуғандан алып бер генә уй ҙа юҡҡа сыҡмай - аурала ҡала. Әгәр кеше насар уйлаһа, аураһында бысраҡ энергетика барлыҡҡа килтерә. Сөнки насар уй - ауыр, бысраҡ, түбән тирбәлешле энергия ҡуйырығы. Күҙәнәктәр, бындай энергия менән туҡланып, ғазаплана һәм ауырый.

Агрессив кеше, шулай итеп, үҙенең кире уйҙары һәм хис-тойғолары арҡаһында үҙ аураһында агрессив энергия барлыҡҡа килтерә. Күҙәнәктәре лә агрессив булыуы мөмкин. Шулай итеп, теләһә ниндәй ауырыуҙың сығанағы булып үҙебеҙ формалаштырған бысраҡ аура тора. Беҙҙең яфаларыбыҙҙа берәү ҙә гәйепле түгел. Бары шуны аңларға кәрәк: уй - көслө йыһан энергияһы. Уйҙарыбыҙ, бигерәк тә хәҙер, тирбәлеүҙәр көсәйгән ваҡытта, бик тиҙ матдиләшә.

Шуға күрә бер кем тураһында ла, бер нәмә - хөкүмәт, етәкселек, күршеләребеҙ, тәбиғәт - тураһында ла насар уйламағыҙ. Беҙ нимәгә лайыҡлы, шуға эйә. Аллаһы Тәғәлә ғәҙел. Сағылыш ҡануны эшләй - Йыһанға нимә ебәрәбеҙ, шул әйләнеп ҡайта.

Беҙҙе уратып алған бөтөн нәмә тере. Әгәр кеше, мәҫәлән, сүп үләнен яралай икән, артабан унда үҫемлектәргә аллергия булыуы ла мөмкин. Әгәр туҙанды әрләһәгеҙ - туҙанға аллергия башланыуы ихтимал. Улар үҙҙәренсә һаҡлана - агрессияны кире ҡайтара.

Шул уҡ ваҡытта, әлеге кешенең агрессив булыуын бөтөн йәмғиәт беләсәк, сөнки мәғлүмәт энергияһы менән алмашыу бар.

Походта, тирә-яҡта кешеләр күп булһа ла, бер ҡатынды бер юлы биш һағыҙаҡ саға. Осраҡлы бер нәмә лә булмай. Бәҡтиһән, ул күп йылдар элек бесәндә бензин һибеп, һағыҙаҡ ояһын яндырған була. Шунан башлап был ҡатынды һағыҙаҡтар "ярата" һәм уларҙың тешләүенән унда аллергия барлыҡҡа килә.

Был осраҡта, хәл-торошто үҙгәртеү өсөн тейешле объекттан ғәфү үтенергә һәм уларға үҙ мөхәббәтенде йүнәлтергә кәрәк. Әгәр ғәфү итһәләр, аллергия бөтәсәк.

Бәләкәй ҡыҙҙа бесәй йөнөнә аллергия сыға. Бәҡтиһән, уның әсәһе бесәйҙәрҙе яратмай икән (ә бала үҫмер ваҡытына тиклем әсәһенең аураһындағы энергия менән туҡлана).

Һәр саҡ фекерегеҙҙе күҙәтегеҙ. Бер ваҡытта ла бер кемде лә гәйепләмәгеҙ - һәр кемдең үҙ үҫеш юлы бар, был юлдар ҡасан да булһа Аллаһҡа килтерә.

Бер кемгә бер ҡасан насар һүҙ әйтмәгеҙ - кеше көйөләнә башлай һәм шулай итеп проблеманы матдиләштерә, ә яуаплылыҡ кире мәғлүмәт һәм энергия биргән сығанаҡҡа ята.

Әгәр кемдер насар нәмә юраһа - ышанмағыҙ. Киләсәк алдан яҙылмаған һәм унда үҫеш варианттары бик күп. Әгәр беҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрһәк, киләсәгебеҙ ҙә яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк. Беҙгә нимә әйтеүҙәре түгел, уны нисек ҡабул итеүебеҙ мөһим.

Насарҙы бәхетһеҙ, ҡурҡаҡ һәм донъя ҡоролошо ҡанундарын аңламаған кеше генә һөйләй. Асыҡ, ихлас кеше бер ваҡытта ла насар нәмә һөйләмәҫ, киреһенсә, бөтөн кире нәмәне мөхәббәт менән яҡтыртыр, хәл-торошто ыңғай юлға һалыр.

Әгәр кешенең уйҙары ыңғай икән, тирә-яҡ мөхите лә әкиәттәге кеүек яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк.

**Каузаль тән (карма тәне)** - беҙҙең элекке тормоштарыбыҙ тураһындағы барлыҡ мәғлүмәт берлеге. Йән мәңге йәшәй.

Баҡалы районының Иҫке Ҡорос ауылында йәшәүсе башланғыс синыфта уҡыусы ҡыҙ бер ваҡыт атаәсәһенә элек Үзбәкстанда йәшәүе, үҙенең элекке ата-әсәһен күргеһе килеүе хаҡында белдерә. Ул бөтөн нәмәне ентекләп һөйләй: ҡайҙа йәшәгән, ата-әсәһе кем, исемдәре нисек, ағалары, апалары, күршеләре кем булған. Ата-әсәһе тотҡан да адрес буйынса хат яҙған. Ысынлап та, ҡыҙҙың һөйләгәндәре дөрөҫ, тигән яуап килгән. Уларҙың ҡыҙҙары һәләк булған икән. Тиҙҙән элекке ата-әсәләре үҙҙәре килә. Ҡыҙ уларҙы танып, ҡосаҡтарына ташлана.

Физик үлемдән һуң эфир тәне - өс, астраль тән - 7-9, менталь тән 40 тәүлек эсендә тарҡала. Әммә мәғлүмәт бер ҡайҙа ла юғалмай, ул каузаль, йәғни карма тәненә яҙылып бара һәм уны, кәрәк саҡта, "тартып" сығарырға мөмкин.

Карма тәне хәҙерге тормошобоҙға, тәү сиратта, яҙмышҡа йоғонто яһай. Илаһтың ҡанундары ғәҙел һәм беҙҙең ғазаптарыбыҙҙа берәү ҙә гәйепле түгел. Әгәр тормошоғоҙ килеп сыҡмай икән, илаһи гармонияның боҙолоу сәбәптәрен табырға һәм уларҙы алып ташларға кәрәк. Яҙмышыңды яҡшы яҡҡа үҙгәртер өсөн гәйебеңде юйырға кәрәк. Кем үпкәләткән, барыһын да ғәфү итегеҙ, улар - беҙҙең үткәндәребеҙҙен, үткән тормоштарыбыҙҙың көҙгөләге сағылышы. Үткәндәрҙән ауыр йөгөн һөйрәмәгеҙ, был бик хәүефле.

Әгәр үткән ваҡиғалар тураһында үкенәһегеҙ (уларҙың һабаҡ икәнен аңламайһығыҙ) икән, тимәк, үткәндәрҙе - ваҡытты, киңлекте, ваҡиғаларҙы үҙгәртергә тырышаһығыҙ, ә был бары тик Аллаһы Тәғәләнең иерархияһында. Шулай итеп, һеҙ Илаһ менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерәһегеҙ, йәғни уға һөкөм итәһегеҙ. Барыһын да ғәфү итеп, эшләнгән, шул иҫәптән үткән тормоштарығыҙҙағы кире эштәрегеҙ өсөн ғәфү итеүҙе һорағыҙ, карма төйөндәре үҙенән-үҙе сиселер - яҙмышығыҙ һәм сәләмәтлегегеҙ яҡшырыр.

Яҙмышығыҙ ауыр, сәләмәтлегегеҙ насар икән - тимәк, аурағыҙ бысраҡ. Ауараны бысратып була икән, тимәк, уны таҙартырға ла мөмкин. Кеше шатлыҡ, бәхет һәм мөхәббәт торошонда икән, ул юғары тирбәлеш энергияһын бирә, аура таҙара, яҙмыш яҡшыра. Йәки ауараны таҙартыу - беҙҙең гонаһтарыбыҙҙан таҙарыныу, карманы таҙартыу ул.

Космоэнергетика сеанстарынан һуң хатта ауыр формалағы ДЦП сирле балалар ҙа үҙ аллы атлай башлай.

Ауараның таҙарыу кимәле һәм уның артабанғы таҙалығы, тәү сиратта, кешенең үҙ етешһеҙлектәрен - уйҙарын, кисерештәрен, ҡылыҡтарын бөтөрөү буйынса алып барған эшенә бәйле. Улар тик ыңғай ғына булырға тейеш.

**Рауфан МОРТАЗИН.**
**(Дауамы бар).**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

## ӘҮҘЕМ БУЛҺАҢ, ҠАРТАЙМАҪҺЫҢ

**Америка ғалимдары раҫлауынса, социаль әүҙемлек өлкән йәштәгеләрҙе инвалидлыҡҡа дусар булыуҙан һаҡлай.**

Тикшеренеүҙәрҙә уртаса йәш кимәле 82-нән уҙмаған 954 кеше үҙе теләп ҡатнашты. Белгестәр уларҙың рестарандарға, спорт сараларына, дуҫтарының һәм туғандарының хәлен белешергә йөрөйҙәрме, юҡмы икәнлеген, волонтерлыҡ менән шөғөлләнеүҙәрен, мәсет һәм сиркәүҙәргә йөрөүҙәрен, ҡыҙыҡһыныу буйынса һәр төрлө клубтарҙа ағза булып тороу-тормауҙарын асыҡланы. Инвалидлыҡ фактын билдәләү өсөн табиптар өлкән йәштәгеләрҙең үҙ аллы туҡланыу, кейенеү, йыуыныу, хәрәкәтләнеү, һауала йөрөү, йорт эштәрен башҡарыу, баҫҡыстан юғары ҡатҡа күтәрелеү һәм унан төшөү, әйберҙәр күтәреп йөрөү мөмкинлектәрен баһаланы. Асыҡланыуынса, социаль әүҙемлектең юғары кимәле көндәлек тормошта инвалидлыҡты икеләтә иҫкәртә ала. Медиктар, социаль әүҙемлек ҡартлыҡта ирекле эшмәкәрлек өсөн кәрәкле нейрондар селтәрҙәре һәм хәрәкәтләнеү һәләтен көсәйтә тип иҫәпләй.

*УҢЫШ ҠАҘАН*

## БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Кеше аңы нимәгә һәләтле?

Кешенең барлыҡ мөмкинлеге менән танышыуы бурыс булып тормай, әммә ҡайһы бер ысулдар барыһына ла хас:

- беҙ уйыбыҙҙа ғына тәнебеҙҙе ташлап китә, стена аша үтә һәм алыҫ арағa күсә алабыҙ;
- беҙ өйҙән йәки эш урынынан сыҡмай ғына башҡаларға көслө йоғонто яһай алабыҙ;
- беҙ үткәндәргә һәм киләсәккә күсә алабыҙ;
- беҙ икенсе кешенең аңына үтеп инеп, уның уйҙарын уҡый алабыҙ;
- беҙ үҙебеҙҙе һәм башҡаларҙы (ситтән тороп) дауалай алабыҙ.

Бер генә ауырлыҡ бар: быларҙың барыһына ла өлгәшергә ярҙам иткән китап ҡына юҡ. Берҙәнбер юл - мөғжизәләр тыуҙырыусы рухи юл.

Был - һеҙҙең менән тирә-яҡ мөхит араһында булған айырмалыҡты бөтөрөү, Йыһан менән берлек, уның менән гармония булдырыу.

Һеҙ оҙон юлды ҡыҫҡа ваҡытта үтеү һәләтегеҙгә инандығыҙ, әммә мөмкинлектәрегеҙҙең сигенә етмәнегеҙ әле.

Шулай итеп, беҙҙең ғүмер камиллығына өлгәшмәгән әле. Тормош байлыҡ, бәхет һәм уңыш ягына үҙгәрһен өсөн өмөт, ышаныс һәм уға ынтылышты юғалтмағыҙ. Һәр кире уй ыңғай үҙгәрештәрҙе өҙөргә һәләтле.

**Сәләмәтлек - тормош сифаты билдәһе**

Был хаҡта яҙғанда мин ҡатынымдың бынан ике быуат элек Латвияның Паланга ҡалаһында йәшәгән нәҫеле, тылсымсыһы һәм дауалаусыһы Бессиҙың ярҙамын файҙаландым.

Латыш халҡы XIII-XVI быуаттарҙа, тевтондар хакимлыҡ иткән осорҙа бер нисә боронғо Балтика ҡәбиләләре берләшеүенән һуң тыуа. Был халыҡ көсө, ҡаһарманлығы, ныҡлы сәләмәтлеге менән айырылып торған һәм ул йырҙарында ла сағылыш тапҡан. Хәҙер килтереләсәк кәңәштәр ҙә йыр булырға хаҡлылыр, тип уйлайым.

Бесси XIX быуат башында тыуа. Бала сағында уҡ үҙен һәләтле рәссам итеп таныта, һуңыраҡ инде психик һәләттәре һәм дауалау һәләте асыла. Уға кешеләр алыҫ-алыҫтарҙан изге кәңәш һорап килә. Әммә Бессиҙың төп хәстәрлеге булып кешеләрҙең сәләмәтлеге тора. Шифалы үҫемлектәр, дарыу үләндәре тураһындағы белем уға әсәһенән күсә һәм ғүмере буйы хеҙмәт итә. Ниндәйҙер кимәлдә ул үҙе уҡ 105 йәшкә етеп, беләменең тере шаһиты була.

Бер нисә йыл элек Таллинда булғанда мин ҙур дауаханаға индем. Бинаның һуңғы ҡатында ҙур рәсемдәр галереяһы урынлаштырылғайны. Дауахана пижамалары кейгән пациенттар ижад өлгөләре алдында ултыра һәм медитация үтә ине. Һәр ауырыуға үҙенең ауырыу характерына тап килгән теге йәки был картинаны "тәғәйенләйҙәр". Ысынлап та, һүрәттәр һәм музыка һауыҡтырыу көсөнә эйә.

**Аңдың һауыҡтырыу көсө**

Аң ауырыу тыуҙырырға ла, уларҙы дауаларға ла мөмкин. Бер юморист юҡҡа ғына: "Тәбиғәт һауыҡтыра, ә табиптар иҫәп яҙып бирә", - тимәгән бит.

Әгәр һеҙ сирләп тораһығыҙ йәки үҙегеҙҙе насар тоябығыҙ икән, табипҡа йүгерергә ашыҡмағыҙ. Тәү сиратта, күңелегеҙҙе күҙҙән үткәрегеҙ. Насар тойоуҙың сәбәбе тәбиғәт түгел, үҙегеҙ булыуы мөмкин.

**Роберт СТОУН.**



## 15 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело была на Кубани", 1-я серия. Сериал
22.25 "Замри, умри, воскресни"
23.30 "Побег", 14-я серия
00.30 "Безумцы"
01.20, 03.05 "Близко к сердцу".
03.00 Новости
03.30 "Третье измерение ада"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 117-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 145-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 222-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пилот международных авиалиний". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Марионетки". Сериал
00.50 "Городок"
23.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.10 "Честный детектив"
02.40 "Суп на одного". Комедия
04.00 "Комната смеха"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские похороны"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть". Док. фильм
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Это правда", "Дураки". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". Сериал
00.30 "Футбольная ночь"
01.05 "До суда"
02.05 "Один день. Новая версия"
02.40 "Проклятый рай-2". Сериал
05.35 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"

### БСТ

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Новости недели"**
**15.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Концерт. Поет Геннадий Родионов"**
**17.00 "Востокнефтезаводмонтаж: 5000 км и судеб"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00, 21.30, 22.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Орнамент"**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматов Саитовым"**
**23.15 "Замандаштар"**
**23.30 Художественный фильм**

## 16 АВГУСТА
## ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани". Сериал
22.30 "Свидетели"
23.30 "Побег". 15-я серия. Сериал
00.35 "Безумцы". Сериал
02.25, 03.05 "Поворот не туда: тупик. Триллер"
03.00 Новости
04.05 "Жизнь"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 118-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 146-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 223-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пилот международных авиалиний". Сериал
22.50 "Тайны следствия". "Роль жертвы", 1-я серия
23.50 "Спасти СССР. Идея Ботвинника"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.10 "Чисто английскле убийство"
03.35 "Обратной дороги нет"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские похороны"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "День Ангела", "Среди бела дня". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Сериал
20.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
22.35 "Частник". Криминальная драма
00.30 "Футбол. Лига чемпионов УЕФА
02.40 "Кулинарный поединок"
03.40 "Советские биографии. Феликс Дзержинский"
04.35 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
05.05 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.30 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорт йыры"**
**13.45 "Семь чудес Башкортостана"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**15.15 "Тамыр". Гора новостей и др."**
**16.10 "Млечный путь". И. Смаков**
**17.10 "Звезды и в сердце моем". Поет Ф. Кильдиярова**
**18.55 "Первенство России по футболу. Второй дивизион"**
**21.00 "Криминальный спектр"**
**21.15 "За порогом"**
**23.45 Художественный фильм**

## 17 АВГУСТА
## СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани". 3-я серия. Драматический сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Побег", 16-я серия. Сериал
00.35 "Калифрения". 11-я серия. Драматический сериал
01.05 "Любовницы". Сериал
02.05, 03.05 "Другая сестра". Мелодрама
03.00 "Новости"
04.15 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 119-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 147-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 224-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пилот международных авиалиний". 13-14-я серии
22.50 "Тайны следствия". "Роль жертвы", 2-я серия
23.50 "Верность подранка. Николай Губенко"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.10 "Чисто английское убийство"
03.35 "Обратной дороги нет"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские похороны. Серго Орджоникидзе"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Победившие смерть"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Старший класс". "Отец". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Бег". "Салочки". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Юная леди"
00.35 "Советские биографии. Лев Троцкий"
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.10 "Проклятый рай-2". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 "Автограф". Н. Мусин**
**16.45 "Бердамлек-Содружество-2011". Белорецкий район**
**17.15 "Тамле" (на башк. яз.)**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм**

## 18 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Дело было на Кубани". Сериал
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Побег". 14-я серия
00.35 "Любовники". Мелодрама
02.25, 03.05 "Ключ от всех дверей"
03.00 Новости
04.05 "Жизнь"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 120-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 148-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 225-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Пилот международных авиалиний". 15-16-я серии
22.50 "Исторический процесс"
00.25 "Я старым не буду. Драма Вампилова"
01.25 "Профилактика"
02.30 "Горячая десятка"
03.30 "Обратной дороги нет"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские похороны"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Весеннее обострение", "Незатянутые шрамы". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Фейерверк". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Криминальный дуэт"
00.35 "Советские биографии. Михаил Тухачевский"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.10 "Проклятый рай-2"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорттар"**
**13.30 "Волшебный курай"**
**14.00 "В активном поиске"**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Биение сердца в ритме танца"**
**16.45 "Бердамлек - Содружество - 2011". Абзелиловский район**
**17.15 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**19.30 "XIII Республиканский конкурс исполнителей кубаира"**
**20.15 "Сенгелдек"**
**20.30 "Семь жемчужин"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**23.45 Художественный фильм**

## 19 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Завтра все будет по-другому"
22.40 "Закрытый показ" "Сатисфакция". Драма
01.40 "Мужья"
04.00 "Лычки"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести ПФО"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 121-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 149-я серия
17.50 "Институт благородных девиц", 226-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Измайловский парк". Юмористический концерт
22.25 "Август 91-го. Версии"
00.10 "Эффект домино". Мелодрама
02.00 "Путь войны". Боевик
03.35 "Сигнал"
05.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские похороны
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Личный рекорд", "Вожак". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Расплата". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Палец". "ПТС". Сериал
23.20 "СССР. Крах империи"
00.35 "Чета Пиночетов"
01.15 "Двенадцать обезьян". Фантастический триллер.
03.50 "Проклятый рай-2".

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкортостан представляет"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.15 "Тамыр". "Каникулы НЕстрогого режима и др."**
**16.15 "Телевидение - моя жизнь"**
**16.45 "Бердамлек - Содружество - 2011"**
**17.15 "Йома"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Еду я в деревню"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.45 Художественный фильм**

## 20 АВГУСТА
## СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.15 "Сказ про то, как царь Петр Арапа женил"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
11.00 "Нонна Мордюкова. Такой ее никто не знал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
13.15 "Приговор"
14.00 "Свидетели"
15.00 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым
16.00 "Любовь без правил". Драма
18.00 "Кто хочет стать миллионером" с Дмитрием Дибровым"
19.00 "Мальтийский крест". Приключения
21.00 "Время"
21.15 "Человек-паук". Фантастический боевик
23.30 "Что скрывает ложь?". Триллер
01.50 "Их собственная лига"
04.05 "Бей и кричи"
05.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.50 "Одиноким предоставляется общежитие"
07.20 "Вся Россия"
07.35 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова
08.50 "Субботник"
09.30, 05.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный репортаж"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Каменская". "Реквием". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Каменская". "Имя потерпевшего - никто". Сериал
16.15 "Субботний вечер"
18.10 "От сердца к сердцу". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Салями". Мелодрама
00.15 "Пункт назначения". Фэнтези
02.05 "Домашняя вечеринка"
03.50 "Старые ворчуны разбушевались"

### НТВ

05.50 "Каникулы в Простоквашино"
06.05 "Криминальное видео". "Список Мухина"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: Розыск!" с Ириной Волк
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Алиби" на двоих". "Проигрыш" Сериал
15.05 "Своя игра"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "Очная ставка"
18.00, 19.20 "Гончие-3". "Полет бумеранга"
19.00 "Сегодня"
20.20 "Самые громкие русские сенсации"
22.55 "Ты не поверишь!"
23.35 "Ронин". Боевик
02.55 "Проклятый рай-2"
04.50 "Алтарь Победы. Партизаны"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.40 "Пиратские острова"**
**09.15 "Третий звонок". Н. Гаитбай "Аты барзын, дарте бар"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 20.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Еду я в деревню"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Забытые войны"**
**19.00 "Муз-базар"**
**19.30 "Хазина". Ишимбайский район**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Художественный фильм**

## 21 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Аты-баты, шли солдаты"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Удовольствие и боль"
13.15 "И примкнувший к ним Шепилов". Док. драма
16.15 "Легенда Зорро". Приключенческий фильм
18.40 "Концерт Софии Ротару"
21.00 "Время"
21.20 "Большая разница"
22.25 "Yesterday Live"
23.20 "Какие наши годы!"
00.40 "Гордость и предубеждение". Мелодрама
02.55 "Пегги Сью вышла замуж"

### РОССИЯ 1

06.05 "Родная кровь"
07.35 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Каменская". "Воющие псы одиночества". Детективный сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Каменская", "Посмертный образ". Детективный сериал
15.45 "Смеяться разрешается"
17.55 "Карусель". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Два билета в Венецию". Мелодрама
22.35 "Гений". Детектив
01.50 "Холостяк". Комедия
03.20 "Сватовство гусара"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.50 "Зима в Простоквашино". Мультфильм
06.05 "Криминальное видео". "Список Мухина"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Собственная гордость"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Алиби" на двоих". "Киношники"
15.05 "Своя игра"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "И снова здравствуйте!"
18.00 "Гончие-3". "Полет бумеранга"
19.00 "Сегодня"
19.20 "Гончие-3"
20.25 "Чистосердечное признание"
22.50 "НТВшники"
23.55 "Бугимен-2". Фильм ужасов
00.50 "В зоне особого риска"
02.25 "Ночной слушатель". Триллер
04.05 "Собственная гордость"
05.00 "Алтарь Победы. Севастополь"

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.30 "Двое заключенных"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "XIII Республиканский конкурс исполнителей кубаира"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Бердамлек - Содружество - 2011". Гала-концерт**
**15.30 "Автограф". Р. Хакимьянов**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Киностудия "Башкортостан" представляет"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Художественный фильм"**

ҮӘТ, ШӘП!

# ҺИН ЯРАТҠАН ҺЫРАНЫ...

## араҡыға тиңләнеләр бит тәки



**Июль баштарында РФ Дәүләт Думаһы депутаттары "Этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереүҙе һәм һатыуҙы дәүләт тарафынан көйләү тураһында"ғы законды ҡайтанан ҡарап, төҙәтмәләр индергәйне. Күптән түгел ил президенты Дмитрий Медведев яңы документҡа ҡул ҡуйҙы. Закон һыра һәм спирт миҡдары 5 проценттан юғарыраҡ булған башҡа продукцияны алкоголле эсемлектәр төркөмөнә индерә һәм уларҙы ларектарҙа, павильондарҙа һатыуҙы, барлыҡ йәмәғәтселек урындарында эсеүҙе тыя, рекламалауҙы сикләй. Был нормалар 2012 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инәсәк.**

Һырасылар, йәки, аныҡлабыраҡ әйтһәк, һыра һатып байырға теләүселәр өсөн тағы бер яңылыҡ: 2013 йылдан башлап үрҙә аталған закондың яңы талаптары үҙ көсөнә инә. Уға ярашлы, ил буйынса 23 сәғәттән алып иртәнге 8-гә тиклем барлыҡ алкоголь продукцияһын һатыу ҡәтғи рәүештә тыйыла. Ул ғына ла түгел, туҡталыштарҙа, вокзалдарҙа, баҙарҙарҙа, автомобиль заправкалау станцияларында һәм аэропорттарҙа урынлашҡан кибеттәрҙә был күбекле эсемлекте һатыу бөтөнләй мөмкин булмаясаҡ. Шәхси эшҡыуарҙар һыраның спирт миҡдары 5 проценттан кәм булғанын ғына һата ала, уныһын да 2013 йылға тиклем генә. Сөнки 2013 йылдың 1 ғинуарынан һыра менән һатыу итеү хоҡуғы магазиндарға ғына биреләсәк.

Ошо уҡ закон буйынса быйыл 21 июлдән балаларға спиртлы эсемлек һатҡан өсөн һатыусы - 5 мең һум, директор - 20 мең, ә ойошма 100 мең һум штраф түләйәсәк. Әгәр ҙә был хәл тағы ла ҡабатланһа, һатыусы өсөн штраф күләме ун тапҡырға арттырылып, 80 мең һум тәшкил итәсәк. Бынан тыш, Енәйәт кодексы тағы бер статья менән тулылана - хәҙер балаларға 2 тапҡырҙан да күберәк спиртлы эсемлек һатып ебәреп тотолған һатыусының үҙен 1 йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәренә йәлеп итеү ҡаралған.

Бөтә был социаль йүнәлешле саралар "эскелектең масштабын кәметеү һәм алкоголизмды профилактикалау маҡсатында дәүләт сәйәсәте концепцияһы" сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Был программа дәүләт властары 2009 йылда Рәсәйҙәге статистика мәғлүмәттәре менән танышҡандан һуң барлыҡҡа килә. 1990 йылда бер кешегә алкоголь ҡулланыу йылына 5,4 литр таҙа спирт тура килһә, 2009 йылға 2 тапҡырға артып, бер кешегә 10 литрғаса барып еткән. Шулай уҡ Рәсәйҙә эскелек йылына 100 мең кешенең ғүмерен өҙә. Был факт та ныҡ ҡына уйландырғандыр хөкүмәт вәкилдәрен.

Ә бына һөт әсеүе нигеҙендә етештерелгән кефир, шулай уҡ кеүәҫ продукттарын етештереүҙе һәм ҡулланыуҙы был закон регламентламай. Шулай ҙа һуңғы осорҙа "ҡымыҙҙы ла алкоголле эсемлектәр рәтенә индерергә кәрәк" тигән тәҡдимдәр ишетелеп ҡала. Әммә ҡымыҙҙы алкоголле эсемлеккә индереүҙе кем ҡабул итер икән? Халҡыбыҙ уны быуаттар буйы ҡулланған, уның менән үҙе лә дауаланған, башҡаларҙы ла дауалаған. Әммә араҡы тигән ағыуҙы ауыҙына алғанға тиклем башҡортта алкоголиктар булмаған. Ғалимдар ҡымыҙҙың әллә күпме сирҙән дауа икәнен күптән иҫбат иткән, ул хаҡта гәзитебеҙҙең киләһе һандарының береһендә мәҡәлә бирергә уйлайбыҙ.

2013 йылдан башлап спиртлы эсемлектәрҙе төндә һемерергә теләүселәр уларҙы бары ресторандарҙа, барҙарҙа һәм кафеларҙа ғына эсә аласаҡ. Был йорттарҙа эсеү, әлбиттә, күпкә ҡиммәтерәккә төшәсәк элек урамда, паркта, башҡа урындарҙа эсеп өйрәнгән әҙәм өсөн.

Тағы бер моментты атамаһаҡ булмаҫ: эсергә теләүселәр үҙҙәренең фатирында "байрам итә" ала шулай ҙа. Закон буйынса, тәбиғәттә эсеү ҙә тыйылмай. Шулай ҙа фатирҙа спиртлы эсемлек эсеү ғәҙәтенә сик ҡуйыусы сәбәптәр ҙә етерлек, мәҫәлән, эскеселәргә күршеләре ризаһыҙлыҡ белдереүе, милицияға, судҡа мөрәжәғәт итеүе мөмкин. Тәбиғәткә сығып эсеү ҙә шулай уҡ күңелһеҙ тамамланыуы, ярайһы ғына суммаға штрафтарға дусар ителәүе бар. Сөнки эскелек табындарының бар ерҙә лә күңелһеҙ тамамланыуы сер түгел бит инде.

Психологик күҙлектән ҡараһаҡ, был яңы ысулдар һыра яратыусылар өсөн барыбер ҙур ғына һынау булып тора. Эскелекте үҙенең күсәрендә әйләнгән, бихисап "пассажир" тейәгән карусель, тип образлы сағыштырғы килә. Кемдең генә күңелле әйләнеүсе каруселдан үҙ теләге менән төшөп ҡалғыһы килһен? Карусель бит бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итә, ултырып алдың да алға елдерәһең - ләззәтле хистәр... Бары тик инерция буйынса ҡолап ҡалыу мөмкинлеге генә ҡурҡыта, ә был ҡурҡыу тағы ла нығыраҡ тотондора, һыйындыра зыр әйләнеүсе уйынсыҡҡа. Тик ябай каруселдән айырмалы рәүештә эскелек каруселе бер ваҡытта ла үҙенәнүҙе туҡтамаясаҡ. Унан арыныр өсөн карусель ҡоршауҙарына сат йәбешкән ҡулыңды ысҡындырырға һәм ситкә осорға, оролоп-бәрелеп, ергә ҡоларға тейеш булаһың. Уның ҡарауы, һин - ерҙә! Әгәр эскесе ошоға әҙер икән, бөгөн үк ташларға тейеш алама ғәҙәтен...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хужа Насретдин муллаға: "Ышанаһыңмы, юҡмы, мин, 50 йәшлек ҡарт, ә үҙемдә һаман да булһа егерме биш йәшлек сағымдағы һымаҡ көс бар", - тип маҡтана. Мулла ышанмай был һүҙҙәргә. Хужа ишеге алдындағы ҙур ташҡа ымлап: "Ошо ташты мин 25 йыл элек тә урынынан ҡуҙғата алмай инем, хәҙер ҙә", - ти. Был көләмәс геройы кеүек, яңғыҙ түгел, ә бергәләп күтәреп ташларға кәрәк ауыр таштарҙы. Сирек быуат элек Горбачев иптәш бер үҙе күтәреп ҡараған ташты ниңә бөгөн бергәләп алып сөймәҫкә?**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺЫУҺЫНДЫ БАҪЫР ЭСЕМЛЕКТӘР

**Лимонлы һыу.** Нәҡ лимонлы һыу сарсауҙы ҡандыра ла инде! Табиптар һыуға лимон һуты ҡушырға тәҡдим итә. Ике литр һыуға ярты цитрус етә. Шулай уҡ минераль һыу ҙа эсергә мөмкин. Минераль һыуҙың һелтелеһен һайлау яҡшыраҡ, тип кәңәш бирә табиптар. Тик шуны хәтерҙә тотоғоҙ: әгәр тоҙ күләме әҙ булһа ғына был һыуҙы туйғансы эсергә мөмкин. Йәғни, бер литр һыуға тура килгән тоҙ 2-3 грамдан артмаҫҡа тейеш. Бындай мәғлүмәттәр тауар ярлығында күрһәтелә. Бындай сикләү тәү сиратта һейҙек ташы, бөйөр ауырыуҙары менән яфаланыусыларға ҡағыла. Ә шифалы минераль һыуҙарҙы бөтөнләй эсергә тәҡдим ителмәй - уларҙың составы йөрәккә көс төшөрә.

**Айран.** Был эсемлек һыуһауҙы ғына түгел, ә асығыу тойғоһон да баҫыуы менән әһәмиәтле. Айран составында аҡһымдар, витаминдар, файҙалы микроорганизмдар күп, ул йөрәккә рәхәтлек бирә, аш һеңдереү эшмәкәрлеген яҡшырта. Тағы ла үпкәләргә кислород килеүен арттырып, тын алыу юлдары эшмәкәрлеген яҡшырта. Был әсселтем һөт ризығын әҙерләү өсөн әллә ни татлы булмаған тәбиғи ҡатыҡ алырға һәм уны минераль һыу менән бутарға. Бер семтем тоҙ һалырға һәм яҡшылап бутарға. Ысын айран килеп сыҡһын өсөн уға ваҡланған укроп, петрушка, кинза, базилик үләндәрен өҫтәйҙәр.

**Йәшел сәй.** Йәшел сәйҙе һалҡын көйөнсә эсергә кәрәк. Уны ҡабаланмай, әҙ-әҙ йотомдар менән эсергә кәңәш ителә. Уға шулай уҡ бөтнөк япрағы, бал, лимон һуты өҫтәп ебәрергә мөмкин.

**Ҡарағаттан морс.** С витаминына бай булған ҡарағат үҙе үк халыҡ медицинаһында температураны төшөрә торған эсемлектәрҙән һанала. Ҡарағаттың ҡыҙыл, аҡ, ҡара төрҙәрен ҡулланырға мөмкин. Шулай ҙа иҫтә тоторға кәрәк, ҡыҙыл ҡарағат витаминға байыраҡ булһа ла (уның бер стаканында С витамины ике лимондағы кеүек), кислоталылыҡ артыҡ булған һәм ашҡаҙан сире менән яфаланған кешеләргә күп ҡулланырға ярамай. Әйткәндәй, дөрөҫ әҙерләнгән морста емешеләктә булған файҙалы матдәләрҙең 2/3 өлөшө һаҡлана. Рецебы ябай ғына: 300 г еләкте иҙергә, һутын айырып алырға һәм емешенә 0,5 стакан шәкәр өҫтәргә. Бер литр һыу өҫтәп, 5 минут ҡайнатып алырға. Һарҡытырға һәм һыуытырға. Һутын өҫтәргә. Һыуытҡыста бындай морс 5 көн һаҡлана.

**Үлән шәрбәте.** Бер бәйләм базилик үләненә 1,5 литр ҡайнаған һыу ҡойорға. 2-3 минутҡа ҡалдырып торорға, 2 балғалаҡ шәкәр өҫтәргә. Ә һуңынан өлөштәргә бүленгән лимон һалырға: эсемлек зәңгәрҙән яйлап ҡыҙыл төҫкә әйләнәсәк. 20 минут төнәтергә, һарҡытырға, һыуытырға. Һыуытҡыста 2-3 көн һаҡларға мөмкин. Әйткәндәй, шәрбәтте шулай уҡ бөтнөк, каркаде (роза), тархун үләндәренән дә яһарға мөмкин.

БАШ ЭШЛӘТМӘК



**Горизонталь буйынса:** 6. Ғәскәрҙең алдан барған төркөмө. 7. Мажорҙың киреһе. 8. Шаҙра. 9. Тәнгә ҡаҙалған сүп. 10. Шыма балыҡ. 12. (...) килеш. 15. Иҫтәлек. 16. Ҡаҙамыҡ, батҡыл ер. 19. Бал ҡорттарының ояһы. 22. Билдәле аккордеонсы (...) Ғайсин. 23. Рамаҙан айындағы оло йола. 24. Тын алыу һәм еҫ һиҙеү ағзаһы. 25. Һелкенеп ятҡан батҡыл ер. 26. Бәхет, рәхәт тормош.

**Вертикаль буйынса:** 1. Иғтибарҙы йәлеп итерлек күренеш. 2. Шаран. 3. Ыҙғыш. 4. Тар ғына буй һыҙат. 5. Балаларҙың икегә бүленеп уйнаған уйыны. 11. Яуҙа дан алған, ҡурҡыу белмәҫ кеше. 12. Көн менән төн араһы. 13. Ғәрәфә. 14. Керпек төбөнә сыға торған эренле шешек. 17. Хаҡ түләп, кәрәк-яраҡ нәмәне ваҡытлыса файҙаланыуға алыу. 18. Сейләнеп торған тире сире. 20. Ике-өс йәшлек һыйыр малы. 21. Һирәк йөн тауарҙан теккән сәкмән. 22. Өйгә ҡайта, һике аҫтына кереп ята (йомаҡ).

**Фәрит РӘМОВ әҙерләне.**

**Бөгөнгө көндә республикала 20 меңдән ашыу кеше көрәш менән шөғөлләнә. Республиканың һәр район һәм ҡалаһында көрәш секциялары булдырылырға һәм унда профессиональ тренерҙар эшләүен тәьмин итергә тейешбеҙ.**



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МАЙҘАНДАРҘА ЛА...

## батыр өлгөһө кәрәк

**Өфө ҡалаһының "Динамо" стадионында Башҡортостан Президенты кубогына һабантуй еңеүселәре араһында көрәш буйынса Асыҡ республика турниры үтте. Башҡортостандың төрлө төбәгенән йыйылған 160-тан ашыу көрәшсе араһында иң таһыллы һәм көслө батыр билдәләнде. Ҡатнашыусылар араһында бер-нисә тапҡыр Рәсәй, Европа һәм донъя чемпионы исемдәрен яулаусы көрәшселәрҙең булыуы сараға абруй һәм мәртәбә өҫтәне. Турнирҙа ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Президенты етәксеһе тәбрикләне.**



- Бөгөн беҙҙә ҙур байрам - көрәш байрамы. Ғәҙел һәм намыҫлы көрәштә еңеү яуларҙай көслө һәм ҡеүәтле батырҙар һәр саҡ кәрәк. Һеҙҙең кеүек егеттәр булғанда беҙҙә барыһы ла һәйбәт буласағына шигем юҡ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Бөгөнгө көндә республикала 20 меңдән ашыу кеше көрәш менән шөғөлләнә. Республиканың һәр район һәм ҡалаһында көрәш секциялары булдырылырға һәм унда профессиональ тренерҙар эшләүен тәьмин итергә тейешбеҙ. Киләсәктә яратҡан көрәште спорт булараҡ үҫтереүгә барлыҡ көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ.

Элек-электән майҙан батырҙары алышы барлыҡ төрки халыҡтары байрамдарында ла иң дәрәжәле урын алып торған. Тамырҙары быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан көрәш менән бөгөн республикала йәше лә, ҡарты ла оло теләк менән шөғөлләнә һәм көрәш әле яңы һулыш кисерә, тиергә була, сөнки ул көндән-көн киң билдәлелек яулай. Бөгөнгө көндә көрәш Башҡортостанда иң киң таралған спорт төрҙәренең береһе һанала. Уға бигерәк тә Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Сибай ҡалаларында, Яңауыл һәм Учалы ҡалаһы һәм райондарында, Мәсетле, Салауат, Саҡмағош, Федоровка, Ейәнсура райондарында ҙур иғтибар бирелә.

Беҙҙең көрәшселәр Европа һәм Донъя чемпионаттарында һәр саҡ юғары кимәл күрһәтеп, тәүге урындарҙы яулауға өлгәшә. Президент кубогына арналған турнирға йыйылған тамашасылар ҙа көс һәм таһыллыҡ, оҫталыҡ һәм ҡыйыулыҡ байрамына шаһит булды. Шәхси иҫәптә көрәшеүселәр алты ауырлыҡ категорияһында көс һынашты. Һөҙөмтәлә Ауырғазы районынан Рәмил Ғәлимов (60 килограмм), Миәкә районынан Марат Зарипов (70 килограмм), Мәләүездән Альберт Рәхмәтуллин (80 килограмм), Өфө ҡалаһының Киров районынан Роберт Исмәғилев (90 килограмм) һәм Мансур Юлтимеров (100 килограмм) һәм Рәдиф Аҡсурин (100 килограмдан артыҡ) еңеүсе исеменә лайыҡ булды. Сараның иң мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы өлөшө, әлбиттә, иң һуңынан Өфөнән Рәдиф Аҡсурин һәм Мәләүез егете Мансур Юлтимеровтың турнирҙың абсолют батыры исеменә көс һынашыуы мәлендә булды. Ике батырҙың - тәжрибә менән йәшлектең алышы берәүҙе лә битараф ҡалдырманы. Абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булыуы Рәдиф Аҡсуринға йәш, әммә көслө Мансурҙы еңеү еңелдән булманы. Турнирҙың төп бүләге - автомобиль асҡысын - абсолют батыр ҡулына республика Президенты тапшырҙы.

Шулай уҡ турнирҙа көрәш ветерандарының да майҙан тотоуы мауыҡтырғыс ваҡиға булды, улар йәштәргә өлгөлө һәм сағыу көрәш күрһәтте. Өс ауырлыҡ категорияһында сығыш яһаусылар араһында тәүге урындар түбәндәгесә билдәләнде: Саҡмағош районынан Илһам Рамазанов (70 килограмм), Октябрьский ҡалаһынан Хәлил Ғәрифуллин (90 килограмм) һәм Ауырғазынан Раян Мырҙабаев (90 килограмдан артыҡ). Командалар араһында беренсе урынға Өфө ҡалаһының Киров районы көрәшселәре, икенсе урынға Саҡмағош һәм Нуриман районы һәм өсөнсө урынға Стәрлетамаҡ ҡалаһы батырҙары сыҡты.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМДӘРЕН ЯРАТАЛАР





Апалы-ҡустылы Әлфинур менән Ишемйәр әлеге көндә ҡымыҙ йәйләүе Аҡбулат тәбиғәтендә бала саҡтарының иң иҫтәлекле мәлдәрен кисерә. Улар Гөлназ һәм Шәрифулла Ҡолһариндарҙың дүрт балалы ғаиләһендә айырым урын биләй, сөнки ун йәшлек Әлфинур ғаиләлә берҙән-бер ҡыҙ бала, ә инде өс йәшлек Ишемйәр иң кинйәләре.

Кескәй генә булыуына ҡарамаҫтан, Ишемйәр инде туғандарына үҙ һүҙен әйтеп тә ҡуйған, сөнки һәр кем уны бәпәй итеп, Ишемкәй тип йөрөтә ине, ә хәҙер "мин Ишемкәй түгел, ә Ишемйәр ағай" тигән ҡәтғи ҡарар унының төп һүҙле ир-егет булып формалашыуына ишара.

Ә бына, бер ҡараһаң, тыныс, уйсан, бер ҡараһаң, уттай шаян, эйәрһеҙ ҙә атҡа менеп сапҡан Әлфинурҙы һис тә берҙән-бер иркә ҡыҙыҡай тип әйтмәҫһең. Унын был ҡылығы, әлбиттә, ғаилә усағының төп усаҡсыһы Гөлназ апайҙан киләлер. Икеһе лә исемдәрен бик ярата, беренсенән, ул саф башҡорт исемен яңғыратһа, икенсенән, уны иң ғәзиз кешеләре ҡушҡан бит. Бына шулай, милләт рухы һәм ата-әсәнең изге ҡөҙрәткә эйә булыуы исемдәрҙең тапкилешлегенә булышлыҡ итә. Иң мөһиме, саф башҡорт исемен йөрөткән балаларҙың үҙ исемен яратыуы һәм исеменә тап төшөрмәй йәшәүе. Сөнки башҡорт исемдәрендә тотош башҡортлоҡтоң холоҡ-фиғеле һәм сағылышы яҙылған.

**Таңсулпан БАЙМЫРҘИНА.**
**Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨГӨҢ КҮП БУЛҺА,

## келәтең тулы булыр

Күптәр дан тураһында хәстәрләй, ә намыҫ хаҡында ҡайғыртырға онота.

**(Публилий Сир).**

Йәшен бейек тауҙарҙы ғына ата.

**(Гораций ).**

Атом быуатында кешеләрҙе әйберҙәр түгел, ә ул әйберҙәрҙең төҙөлөшө борсой.

**(Иосиф Бродский).**

Етди булырға тырыш - был да ғорурлыҡ, әммә ул әйләнә-тирәләгеләрҙең иғтибарына һәм асыуына аҙыраҡ эләгә.

**(Жюль Ренар).**

Аҡылдан шашып ратыуҙан ҡурҡ, ысын мөхәббәт асыҡ һәм тыныс була.

**(Генри Торо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше кәңәш һорап аҡһаҡалға килә һәм:**

**- Мин түҙемлеге һуңғы сиккә еткән кешемен. Ҡатыным, балаларым һәм туғандарым менән бергә бәләкәй генә, бер бүлмәнән торған йортта йәшәйбеҙ. Бер-беребеҙгә ҡысҡырышабыҙ, асыуланабыҙ, талашабыҙ. Аҡылдан яҙып барам, нервылар шартлап өҙөлөргә тора. Ни эшләргә миңә, әйтсе, аҡһаҡал?- ти ул.**

**Бер аҙ уйлап торғандан һуң аҡһаҡал шулай ти:**

**- Һин мин кәңәш иткәнде эшләргә вәғәҙә бирәһеңме?**

**- Вәғәҙә бирәм, - ти кеше, - һеҙ әйткәндәрҙең барыһын да үтәйәсәкмен...**

**- Ярай, улайһа. Ҡуранда малдарың бармы?**

**- Бар. Һыйыр, кәзәләр, тауыҡтар... - тип һынап китә кеше.**

**- Уларҙың барыһын да үҙегеҙ йәшәгән өйгә күсер. Бер аҙнанан килерһең, - тип һүҙен тамамлай аҡһаҡал.**

**Кеше аптырап ҡала, әммә хөрмәтле аҡһаҡалға вәғәҙә биреп өлгөрҙө бит, уны үтәмәй сараһы юҡ. Шуға ла өйөнә ҡайта ла аҙбарҙағы хайуандарын йортона ҡыуалап индерә. Бер аҙна үткәс, тағы аҡһаҡалға килә. Уға ҡарап тороуы ҡыҙғаныс була: йонсоған, хәлһеҙләнгән.**

**- Мин башҡаса булдыра алмайым, хөрмәтле аҡһаҡал. Беҙҙең йорттағы шау-шыу, бысраҡтан барыбыҙ ҙа аҡылдан яҙыу сигендәбеҙ, - ти кеше.**

**- Хәҙер өйөңә ҡайт, малдарыңды кире аҙбарыңа ҡыуалап сығар, - ти аҡһаҡал.**

**- Теге кеше йортона йүгереп ҡайта. Икенсе көндө ул аҡһаҡалға тағы килә һәм: "Тормош шул тиклем матур икән! Малдарҙы сығарғас, барыһы ла яҡшы, таҙа булып ҡалды. Өйөбөҙ ожмахҡа әйләнде..." - ти ул шатлыҡтан балҡып". Бына шулай, һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ, хөрмәтле уҡыусылар.**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
12 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 3172